ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14-20 ғинуар (һыуығай)

2023

№ 1 (1043)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һуңғы юлға оҙаттылар**



4

**Юҡ, беҙ быуынды юғалтманыҡ!**



6

**Ысын ижадсыларҙың...**

**рухы азат булған, яңы Рәмиҙәрҙе тыуҙыра торған заман килеренә ышанам**



8-9

**Хәмерле дәүер**



10-11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы 2023 йылда ла "Киске Өфө" менән бергә ҡалыуығыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылырға өлгөрмәй йә онотоп ҡалыусылар булһа, әйтә күрегеҙ: улар "Киске Өфө"гә (ПР905 индекс) 17 ғинуарға тиклем яҙылып, февралдән алдыра башлай ала. Биш айға яҙылыу хаҡы - 665 һум 50 тин тора. Бергә булайыҡ!*

# БӘХИЛ БУЛ, ИЛ АҒАҺЫ!



**Республикабыҙ ауыр юғалтыу кисерҙе. 2023 йылдың 11 ғинуарында күренекле дәүләт, сәйәсәт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов 88 йәшендә вафат булды.**

М.Ғ. Рәхимов 1934 йылдың 7 февралендә Башҡорт АССР-ының Күгәрсен районы Тәүәкән ауылында тыуған.

1956 йылда Өфө нефть техникумын тамамлап, Өфө нефть эшкәртеү заводында оператор булып эшләй башлай. 1964 йылда производствонан китмәйенсә Өфө нефть институтын тамамлай. 1960 йылдан 1990 йылға тиклем КПСС-тың XXII съезы исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводында ҡулайлама начальнигы, цех начальнигы урынбаҫары, производство начальнигы урынбаҫары, яңы производстволарҙы эшләтеү һәм көйләү буйынса баш инженер урынбаҫары булып эшләй. 1976 йылдан 1978 йылға тиклем заводтың баш химигы - баш инженер урынбаҫары, 1978 йылдан 1986 йылға тиклем - баш инженер, ә 1986 йылдан 1990 йылға тиклем завод директоры була.

СССР халыҡ депутаты һәм СССР Юғары Советы ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының халыҡ депутаты һәм Өфө ҡала Советы депутаты итеп һайлана.

1990 йылдан 1993 йылға тиклем М.Ғ. Рәхимов - Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы Рәйесе. Был осорҙа Башҡортостан Республикаһының яңы Конституцияһы, Башҡортостан Республикаһының Дәләт суверенитеты тураһындағы декларация ҡабул ителә, Федератив Договорға һәм уға Башҡортостан Республикаһынан Ҡушымтаға ҡул ҡуйыла.

1993 йылдың 12 декабрендә М.Ғ. Рәхимов Башҡортостан Республикаһының Беренсе Президенты итеп һайлана. 1994 йылдың авгусында Рәсәй Федерацияһы дәүләт власы органдары менән Башҡортостан Республикаһы дәүләт власы органдары араһында хакимиәт даирәһе сиктәрен айырыу һәм үҙ-ара вәкәләттәр бүлешеү тураһындағы Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Договорына ҡул ҡуйыла.

1998 йылдың 14 июнендә һайлау йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһына ҡайтанан һайлана.

1993-2001 йылдарҙа - Рәсәй Федерацияһының Федерация Советы һәм Дәүләт Советы ағзаһы.

1999 йылда М.Ғ. Рәхимов - "Ватан - Бөтә Рәсәй" Бөтә Рәсәй партияһын ойоштороусыларҙың һәм уның рәйестәштәренең береһе була. 2001 йылда был партия "Берҙәм Рәсәй" партияһына инә.

2003 йылдың 21 декабрендә өсөнсө тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Президенты итеп һайлана.

Рәсәй Президенты В.В. Путиндың тәҡдиме буйынса 2006 йылдың 10 октябрендә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары М.Ғ. Рәхимовҡа киләһе биш йылға Президент вәкәләттәрен тапшыра.

2010 йылдың 15 июлендә Рәсәй Федерацияһы Президенты Д.А. Медведев М.Ғ. Рәхимовтың Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһынан отставкаһын ҡабул итә.

2010 йылдың октябренән Мортаза Ғөбәйҙулла улы - "УРАЛ" хәйриә фонды советы рәйесе. 2010 йылдың декабренән 2012 йылдың июненә тиклем - "Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең Директорҙар советы ағзаһы.

Республика етәксеһе булып эшләгән йылдарҙа М.Ғ. Рәхимов уның социаль-иҡтисади һәм мәҙәни үҫешенә ғәйәт ҙур өлөш индерә. Башҡортостан илдең төп, сәнәғәт йәһәтенән алға киткән төбәктәренең береһенә, федераль бюджет донорына, ҡеүәтле нефть сығарыу һәм нефть эшкәртеү, химия һәм нефть химияһы, машиналар эшләү һәм энергетика, аграр етештереү үҙәгенә әүерелә. Уның тырышлығы менән тиҫтәләрсә яңы предприятие һәм производство асыла, йөҙҙәрсә социаль объект төҙөлә, ҡала һәм райондарҙың юл, инженерлыҡ инфраструктураһы яңыртыла, торлаҡ төҙөлөшө үҫә, биләмәләргә газ үткәреү һәм төҙөкләндереү киң ҡолас ала. Республиканың мәғарифты, фәнде, һаулыҡ һаҡлауҙы, сәнғәтте, спортты үҫтереүҙәге ҙур ҡаҙаныштары Мортаза Ғөбәйҙулла улының исеме менән бәйле. Уның тырышлығы менән дәүләт һәм туған телдәргә булышлыҡ итеү өсөн шарттар тыуҙырыла, ҙур милли-мәҙәни берекмәләр, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы ойошторола, республика халыҡтарының тәүге ҡоролтайҙары һәм съездары үткәрелә. Уның етәкселегендә "УРАЛ" хәйриә фонды социаль әһәмиәтле байтаҡ проекттарҙы тормошҡа ашыра.

Күп йыллыҡ һөҙөмтәле хеҙмәте өсөн М.Ғ. Рәхимов I һәм II дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн", Рәсәй Федерацияһы халыҡтары дуҫлығы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, "Почет Билдәһе" ордендары, Рәсәй Федерацияһы Президентының Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең, Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы Федерация Советының Почет грамоталары, Рәсәй Федерацияһы Президентының Рәхмәт хаттары, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн", "Халыҡтар дуҫлығы", Салауат Юлаев ордендары, шулай уҡ бик күп ведомство, сит ил һәм йәмәғәт наградалары менән бүләкләнгән. Уға "РСФСР-ҙың атҡаҙанған рационализаторы", "Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған нефтсеһе" тигән маҡтаулы исемдәр бирелгән. М.Ғ. Рәхимов - Өфөнөң, Стәрлетамаҡтың, республикалағы башҡа ҡала, райондарҙың Почетлы гражданы.

Мортаза Ғөбәйҙулла улы дәүләт эшмәкәре, федераль кимәлдәге етәксе сифаттары, стратегик фекерләү, төплө ҡарарҙар ҡабул итеү оҫталығы, аралашыуҙағы ихласлығы, ябай кешеләрҙең проблемаларын хәл итергә тырышыуы менән һәр саҡ айырылып торҙо. Үҙенең күп йыллыҡ фиҙаҡәр хеҙмәте менән Мортаза Ғөбәйҙулла улы республикала һәм унан ситтә тәрән ихтирам ҡаҙанды.

Башҡорт халҡының бөйөк улы, ҙур дәүләт, сәйәсәт һәм йәмәғәт эшмәкәре, мәртәбәле етәксе һәм республика патриоты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов хаҡында яҡты иҫтәлек беҙҙең йөрәктәрҙә мәңге һаҡланыр.

**Р.Ф. Хәбиров, К.Б. Толкачев, А.Г. Назаров, М.В. Забелин, А.А. Касьянов, А.Ш. Бадранов, Р.Х. Моратов, А.В. Марзаев, Л.З. Иғтисамова, И.Х. Сәғитов, И.А. Тажетдинов, И.И. Фәзрахманов, А.Н. Шельдяев, А.Ф. Абдрахманов, У.Т. Килсенбаев, И.Р. Әхмәтвәлиев, А.Н. Лазеев, Р.Р. Мәүлиев, В.П. Угаров, М.С. Исҡужин, Р.И. Байдәүләтов, Р.С. Баҡыев, Р.Ү. Диваев, И.Ә. Ғәбитов, А.Т. Сәғитов, У.Н. Бакиров, Ф.Ә. Ямалетдинов, П.Р. Качкаев, К.Н. Рамазанов, В.Б. Мартыненко, В.М. Шәрипов, Г.Ф. Мирошниченко.**

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ШӨКӨР ИТЕП ЙӘШӘЙЕК!

***Фәйрүзә ЮНЫСОВА, Аҫҡын мәғлүмәт үҙәге директоры:*** Мин бик күптәр менән аралашам, эш буйынса ла, былай ҙа, тигәндәй. Кемде генә күрһәң дә, башын сиргә һалған, һәр иртәһен тормошона зарланыуҙан башлай. Шул уҡ ваҡытта бөтә кеше магазиндарҙа йөрөй, кәрзиндәр тултырып ниҙер һатып ала. Бына әле Яңы йылдың оҙайлы байрам көндәрендә лә халыҡ муҡсалап-муҡсалап аҙыҡ-түлек артынан йөрөй. Ә был байрамға әҙерлек ваҡытында бер кис өсөн күпме аш-һыу бешерелә, күпме аҡса сарыф ителә! Гүйә, был кешеләр йыл буйына ашамай йөрөп, бер ултырып туйынып ҡалырға итәләр һымаҡ.

Абза әбейебеҙ - ағинәйебеҙ бар ине, ул: "Балам, ҡәнәғәт эйәһе - бай", - ти торғайны. Өләсәйем дә заманында беҙгә: "Балам, шөкөрһөҙ булма, шөкөрһөҙлөк башҡа бәлә һалыр", - тип өйрәтеп үҫтерҙе. Бәләкәйҙән шулай аңыбыҙға һеңгән, мәғәнәһен үҫә төшкәс кенә аңланым. Заманыбыҙ ығы-зығылары, тормошобоҙҙағы моң-зар шөкөр итә белмәүебеҙ арҡаһында түгелме икән, тип уйланам. Шуға, Яңы йыл, башҡа байрамдар етә башлаһа, халыҡ тағы ла шашына, тип, хәүефем арта. Уйлаһаң, өҫтәлдәребеҙҙә көн дә ҡунаҡ һыйы инде: йәшелсә-емеште йыл әйләнәһенә ашайбыҙ, ризыҡтың үҙебеҙ етештергәненең дә, һатып алынғанының да ниндәйе генә юҡ. Тик уны ни өсөн шул тиклем исраф итергә?

Исраф итеү ризыҡҡа ғына ҡағылмай, беҙҙе уратып алған һәр нәмәгә шундай еңел ҡараш бар. Мәҫәлән, бөгөн бала ата-әсәһенән үтенеп һорап берәй уйынсыҡ алдыра икән, бер аҙна үтәме-юҡмы, шул уйынсыҡ сүплек башында ятыуы ихтимал. Бәләкәйҙән шулай әйберҙең, аҡсаның ҡәҙерен белмәй үҫә бала, ғаиләлә шулай тәрбиә бирелә. Хәтерегеҙҙәлер, беҙҙең бала саҡта "Һайлау - байрам" ти торғайныҡ, сөнки атай-әсәй иртә менән һайлауға бара ла, әфлисун, лимон, керәндил һатып алып ҡайта ине. Шундай тәмлекәстәрҙе байрам көндәрендә генә ашаныҡ. Уларҙың аҡса емеше икәнен дә яҡшы төшөнә инек. Балалар ғына түгел, үҙебеҙ ҙә аҡсаның ҡәҙерен белмәй башланыҡ кеүек. Элек өлкәндәр бер күлдәктә 12 ямау булмаһа, уның өсөн Хоҙай ҡаршыһында яуап бирәһең, тиерҙәр ине һәм кейемде һаҡлап кейергә өйрәттеләр. Хәҙер тегендә барһаң да яңы күлдәк, бында барһаң да - яңы күлдәк, был күлдәктә мине күрҙеләр, тибеҙ ҙә тағы яңыһын алабыҙ. Бындай әрәм-шәрәмлек башҡорттоң тәбиғәтендә булмаған. Беҙҙең олатай-өләсәйҙәр иҫ киткес зауыҡ менән кейенгән, матур итеп ҡайып, балитәкләп күлдәктәр теккән, биҙәүестәре күҙҙең яуын алырлыҡ булған, өйөн дә зауыҡ менән биҙәгән, таҙа тотҡан. Әммә байрамдарға кейә торған иң ҡәҙерле әйберҙәрен һандыҡ төбөндә һаҡлаған. Гел бер кейемдә йөрөгөҙ, тимәйем. Шулай ҙа сама тигәнде онотмаһаҡ ине.

Күңелемә шом һалған тағы бер күренеш тураһында ла әйтеп китмәй булдыра алмайым. Ҡунаҡ йыйғанда өҫтәлдәребеҙ ризыҡтың муллығынан һығылып тора, уны шул тиклем төрләндереп тултырабыҙ, ә иң ҡәҙерлеһе - икмәккә урын ҡалмай! Икмәкте ҡайҙалыр ситкә, йәки теҙелгән тәрилкәләр эргәһенә таратып һалып сығалар. Шундайҙы күрһәм, күҙҙәремә йәш төйөлә. Былай итеүселәр икмәк бар булһын өсөн ниндәй көс түгелеүен аңламай, буғай. Тимәк, хеҙмәт кешеһенең эшен һанлау, уның үҙенә хөрмәт менән ҡарауҙың һирәк күренешкә әүерелеүе лә сәбәпселер исраф итеү, шөкөр ҡыла белмәү осраҡтарына. Бына ошоларҙың барыһы тураһында ла уйланығыҙ, Хоҙайҙың биргәненә шөкөр ҡылығыҙ, һәр хеҙмәт кешеһе хөрмәткә лайыҡ булыуын иҫтә тотоғоҙ һәм исраф итеүҙән һаҡланып йәшәгеҙ, милләттәштәр!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Бөтөн донъя башҡорттары королтайы 2023 йылды Фән һәм мәғрифәт йылы тип иғлан итте. Йәмәғәтселек иғтибарын фән өлкәһендә әүҙем эшләгән ғалимдарға, уларҙың хеҙмәттәренә йүнәлтеүгә бағышланасаҡ был йылдан нимәләр көтәһегеҙ?**

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры:*** Беҙҙең ойошма Фән һәм мәғрифәт йылына былтырҙан ныҡлы нигеҙ һалды. Үткән йылда Рәсәйҙә БМО иғлан иткән Халыҡ-ара фундаменталь фәндәр йылын асыу хоҡуғы Башҡортостанға бирелгәйне һәм республика уны "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексын асыу тантанаһына тап килтереп эшләне. Төпкөлдә төҙөлгән музей дәрәжәле ғалимдарҙы, абруйлы ҡунаҡтарҙы ҡабул итте. Был сара беҙҙең дә ил кимәлендә етди урын алып тороуыбыҙҙы, фән өлкәһендә үҙ һүҙебеҙ, үҙ йөҙөбөҙ булыуын асыҡ күрһәтте.

Яңы музей комплексы - ул Рәсәйҙә палеолит дәүере мәмерйәһенә арналған берҙәнбер үҙәк. Музей етди ғилми эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде һәм ошо ҡыҫҡа ваҡыт арауығында уның фәнни яҡтан әһәмиәтен Рәсәй һәм сит ил ғалимдары юғары баһалап та өлгөрҙө.

Идеяһынан алып тормошҡа ашырыуға тиклем был проект өҫтөндә эш тиҫтә йылға яҡын ваҡытты алды. "Шүлгәнташ"ты асҡас, Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге үҙенең көндәлек эштәренә ҡайтыр тип көткәйнек. Әммә республика етәкселеге беҙгә яңы проект тапшырҙы. "Күсмә цивилизациялар музейы" тип аталасаҡ ул проект яңы фәнни эҙләнеүҙәргә, археологик ҡаҙыныуҙарға, сәфәрҙәргә юл асты. Беҙҙең ойошма нигеҙендә булдырылған ғилми-тикшеренеү төркөмө Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстандың ғилми архивтарында күсмә цивилизацияларға бәйле мәғлүмәт туплап өлгөрҙө. Киләсәктә Төркиәгә, бәлки, Иранға сығырға тура килер.

Музейҙа атты ҡулға эйәләштергән замандан - бронза быуаттан алып, һуң Урта быуатҡа тиклемге дәүерҙе сағылдырған мәғлүмәт тупланасаҡ. Әммә беҙҙә башҡа дәүерҙәрҙән айырмалы рәүештә, Алтын Урҙа дәүеренә ҡараған археология ҡомартҡылары насар өйрәнелгән. Шуға быйыл ҡар ятҡансы археологик эҙләнеүҙәр алып барҙыҡ, киләһе йылдарҙа ла ошо эште дауам итәсәкбеҙ. Экспозиция тәү сиратта үҙебеҙҙә табылған ҡомартҡылар менән тулыланасаҡ.

Остазыбыҙ, арҙаҡлы ғалим-археолог Нияз Мәжитовтың хәтеренә арналған халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәрҙек. Башҡорт академигы - Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә ныҡ хөрмәт ителгән шәхес. Нияз Мәжитовтың исеме беҙгә фәнни форумға абруйлы ғалимдарҙы йыйырға ярҙам итте. Был сара Күсмә цивилизациялар музейы проектын фәнни йәһәттән юғары кимәлдә тикшерергә, музей концепцияһын эшләүгә белгестәрҙе йәлеп итергә мөмкинлек бирҙе. Беҙ дөрөҫ юлдан барабыҙмы, кемдәр беҙгә фекерҙәш - ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап алдыҡ, урынлы тәҡдимдәр, конструктив тәнҡит һүҙҙәре ишеттек. Һәр проект нигеҙен етди фәнни эш тәшкил итергә тейеш. Беҙгә был йәһәттән еңелерәк. Сөнки көслө команда тупланыуынан, республика етәкселегенең беҙгә терәк булыуынан тыш, Күсмә цивилизациялар музейының ныҡлы нигеҙен тәшкил итәсәк Нияз Мәжитовтың мираҫы бар.

***Зәйтүнә ШӘРИПОВА, филология фәндәре докторы:*** Үҙгәртеп ҡороуҙан һуңғы йылдарҙа фән онотолоп ҡалғандай булды. Сөнки унда йылғырлыҡ, аҡса эшләү һәләте кеүек сифаттар алға сыҡты һәм бер ваҡыт хатта шулай булып китте: мәктәптә йүнләп уҡый алмаған, юғары белеме булмаған кешеләр ҙур аҡсаға эйә була башланы. Бәхеткә күрә, һуңғы осорҙа фәнгә ҡараш үҙгәрҙе, сөнки йәмғиәттә яңы технологиялар һәм яңыса мөмкинлектәр нигеҙендә иҡтисадты үҫтереү проблемаһы алға сыҡты. Үҙәк телевидениены ҡараһаҡ, хөкүмәт тә, дәүләт етәкселәре лә фәнни эшмәкәрлеккә, фәнни эҙләнеүҙәргә, тормоштоң, бигерәк тә иҡтисадтың нигеҙҙәрен фәнгә таянып ҡороу хаҡында һүҙ йөрөтә. Йәштәрҙе был йәһәттән хөкүмәт бик ҡарай, төрлө конкурстар, лидерҙар мәктәбе - барыһы ла фәнде үҫтереүгә йүнәлтелгән. Хатта хәҙер мәктәптәрҙә лә шундай йүнәлештәр асып, балаларҙы эҙләнеүҙәргә, фәнгә ылыҡтырыу - ул хөкүмәттең иң алға ҡуйған сәйәсәтенең береһе, тип әйтер инем. Шуға беҙҙә лә эште әүҙемләштереү йәһәтенән Фән һәм мәғрифәт йылы иғлан ителгән икән, быға бик ихлас шатланам. Ысынлап та, донъяны, тормошто алға алып барыу, үҫешкән халыҡтарҙан, илдәрҙән артта ҡалмау, улар менән тиң барыу өсөн белем дә, фән дә кәрәк, был идея беҙҙең элекке яҙыусыларыбыҙҙың фекерендә лә сағыла.

"Мәғрифәт" ул боронғо ғәрәп һүҙе, "ғариф" тигән нигеҙҙән алынған һәм "уҡымышлы", "белемле" тигәнде аңлата. Мәғрифәткә эйә булыу ана шул фәнни нигеҙҙәрҙе лә үҫтереүҙе аңлата. Мәғрифәт, ғөмүмән, үҙ эсенә мәҙәниәтте лә, әҙәбиәтте лә, сәнғәтте лә, фәнде лә ала. Әгәр уның боронғо мәғәнәһен күҙ уңында тотһаҡ, шундай ҙур мәғәнәле һүҙ ул.

Мәғрифәт тигәндә, мәғрифәтселәрҙе лә хәтергә төшөрәбеҙ, Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк" тигән шиғыры бөгөнгө көнгә лә ауаздаш. Шағирҙың мәғариф темаһына арналған махсус шиғырҙары ла бар, хатта, француз телен белеү ҙә яҡшы, тип яҙып сыға ул. Был йәһәттән беҙҙең халыҡ борон-борондан фәнгә, мәғарифҡа бик ыңғай мөнәсәбәттә булған. Йыл Фән һәм мәғрифәт йылы тип иғлан ителгәс, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы төрлө саралар, конкурстар ҙа ойошторор, моғайын. Хәҙер инде төпкөлдә ятаһыңмы, баш ҡалала йәки башҡа ерҙә йөрөйһөңмө - бөтәбеҙҙең дә мөмкинлектәр тигеҙ, шуға ла үҙеңдең урыныңды табыуға, идеяңды тормошҡа ашырыуға мөмкинлек биргән был йылда бигерәк тә йәштәрҙең ошо сараларҙа әүҙем булыуын теләйем.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү реформаһы барышы тикшерелде. 2023 йылда проектҡа йомғаҡ яһаласаҡ, унда төбәктәрҙә сүпте сорттарға бүлеү пункттары, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар өсөн полигондар булыуы, шулай уҡ сүпте айырып йыйыуҙы ойоштороуҙы ҡараясаҡтар. Әле республикала сүптең 46 проценты эшкәртелһә, 2030 йылға был һан - 100, утилизация 50 процентҡа етергә тейеш. Бының өсөн әүҙем рәүештә инвесторҙар йәлеп ителә.

✓Оҙайлы ялдарҙан һуң Башҡортостанда киҙеү һәм киҫкен респиратор вируслы инфекция йоҡтороусылар һаны 52 процентҡа кәмегән. Роспотребнадзор билдәләүенсә, йылдың тәүге аҙнаһында был сирҙәрҙең 23635 осрағы теркәлгән, уларҙың өстән бер өлөшө - балалар. Был эпидемиологик миҙгелдә киҙеүҙең А вирусы йышыраҡ осрай (75,03%), В киҙеүе вирусы - 11, 4%.

✓Яңы йыл каникулдарында Башҡортостан тәбиғәт парктары туристар араһында бик популяр булған. Республиканың айырыуса һаҡланған тәбиғи территориялары дирекцияһы хәбәр итеүенсә, тәүге урында Ирәмәл тауы тора. Аҙна эсендә унда 1080 турист килгән. Икенсе урында - Мораҙым тарлауығы, унда 388 кеше сәйәхәт ҡылған. "Ҡандракүл" тәбиғәт паркында рәсми теркәлгән туристар иҫәбе - 311. "Урал легендаһы" туристик поезы менән ҡулланыусылар ҙа был осорҙа 2 мең пассажирға артығыраҡ булған, былтырғы йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда, был 20 процентҡа күберәк. Маршрут Абҙаҡ тау саңғыһы комплексына пассажирҙар йөрөтә.

✓Башҡортостандың Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау шихандары ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы статусын алыу өсөн объекттарҙың яҡынса исемлегенә индерелде. Был хаҡта республика етәксеһе хакимиәтенең "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә хәбәр ителә. "ЮНЕСКО - Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының абруйлы учреждениеларының береһе, конъюнктураға ҡарамаҫтан, шихандарҙың үҙенсәлекле булыуын, уларҙың юғары ҡимmәтен һәм әһәмиәтен таный", - тиелә хәбәрҙә. Бөтә донъя мираҫы объекттары исемлегенә индереү - ул шихандарҙы һаҡлап ҡалыу ысулы ғына түгел. Был донъя даны һәм һөҙөмтәлә ҡеүәтле иҡтисади стимул.

✓ *Беҙҙең бик тә өмөтлө, байтаҡ өлкәләрҙә уңыш ҡаҙанырлыҡ йәштәребеҙ әле лә күп. Улар тағы ла күберәк булһын тиһәк, мәғариф өлкәһендә күҙгә бәрелеп торған бер үк уҡыу әсбаптарын ғына ҡулланып уҡытыуҙан арыныу фарыз.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2023 йылды Фән һәм мәғрифәт йылы тип иғлан итте. Йәмәғәтселек иғтибарын фән өлкәһендә әүҙем эшләгән ғалимдарға, уларҙың хеҙмәттәренә йүнәлтеүгә байышланасаҡ был йылдан нимәләр көтәһегеҙ?***

***Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, журналист:*** Фән һәм мәғрифәт - бер-береһенән айырып алғыһыҙ төшөнсәләр, уларҙың яҡынлығын һәм эске бәйләнешен бер кем дә инҡар итә алмай. Ошо ике ижтимағи факторҙың кешелек донъяһы үҫешендә хәл иткес роль уйнағанына һис бер шик юҡтыр. Әлбиттә, логик яҡтан, тарихи күҙлектән сығып ҡарағанда, цивилизация теге йәки был йәмғиәттә мәғрифәт идеялары таралыу һөҙөмтәһендә хасил була. Тирә-яҡты, тәбиғәтте, йәмғиәтте һәм кешенең үҙен танып белеү барышында кешелектең белем составы үҫешә һәм ҡатмарлаша бара, йәшәйеш ҡанундары асыҡлана, белем эстәү, махсус тикшеренеү аша хәҡиҡәткә төшөнөү ысулдары формалаша. Ә был кеше эшмәкәрлегенең айырым бер төрөн - интеллектуаль хеҙмәт менән шөғөлләнеү өлкәһенә нигеҙ һала. Йәшәйештең төрлө өлкәләренә ҡараған фән тармаҡтары хасил була һәм фән күп быуаттар дауамында кешелек мәҙәниәте прогресын билдәләүсе төп факторға әйләнә. Бер үк ваҡытта йәш быуындарҙы белем менән бергә фән ҡаҙаныштары нигеҙҙәре менән таныштырыу мохтажлығы тыуа.

Илдә дөйөм мәғрифәткә һәм махсуслаштырылған мәғарифҡа ижтимағи үә матди иғтибар етешмәһә, иҡтисадта ғына түгел, барса фән тармаҡтарында, техника һәм технология менән бәйле етештереү йүнәлештәрендә, шулай уҡ гуманитар өлкәләрҙә лә тейешле кимәлдә, хәҙерге заманға ярашлы үҫеш күҙәтелмәйәсәк. Һуңғы йылдарҙа бөтөн донъя иҡтисадында яңы тенденция - дәүләттең һәм барса граждандарҙың матди һәм рухи ихтыяждарын яңы технологиялар уйлап табыу һәм быға тиклем һис бер күҙәтелмәгән тиҙлектә уларҙы ғәмәли ҡулланылышҡа индереү өҫтөнлөк алды. Элеккесә, бары тик тәбиғи ресурстарҙы ғына ҡулланып, сеймал һатып, ил иҡтисадын йылдам үҫтереү мөмкин булмаясаҡ.

Бына ошо яңы шарттар мәғрифәткә һәм фәнгә яңы технологик ҡараш булдырыуҙы, ошо өлкәләрҙә барса иҫке ҡануни һәм бюрократик идара итеү ысулдарынан ваз кисеп, яңы иҡтисади-технологик сәйәсәтте ғәмәлгә ашырыу бурысын ҡуя. Илдең иң юғары идара итеү органдары был хәҡикәтте яҡшы аңлай. Әммә ошо ҡотолғоһоҙ аҙымдарҙы эшләүгә граждандар йәмғиәтенең дә әҙер булыуы фарыз, ошондай үҙгәрештәрҙе ҡабул итеү һәм уларға булышлыҡ итеүҙән башҡа киләсәккә тура юлды күҙ алдына килтереп булмай.

Үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы алғанда, беҙҙең ватандаштарыбыҙҙың генетик (нәҫел) һәм интеллектуаль потенциалы бик көслө, беҙҙең ерлектә ил кимәлендә билдәле ғалимдар, физик-математиктар, иҡтисадсылар, финансистар һәм башҡа зыялылар үҫеп сыҡҡан. Беҙҙең бик тә өмөтлө, байтаҡ өлкәләрҙә уңыш ҡаҙанырлыҡ йәштәребеҙ әле лә күп. Улар тағы ла күберәк булһын тиһәк, мәғариф өлкәһендә күҙгә бәрелеп торған саманан тыш бер төрлөлөктән, уҡыусы балаларҙың барсаһын да бер үк программа, бер үк ысул, бер үк уҡыу әсбаптарын ғына ҡулланып уҡытыуҙан арыныу фарыз. Иғлан ителгән фән һәм мәғрифәт йылында ошондай фекерҙәргә ҡолаҡ һалһындар ине идара итеүселәребеҙ, тим.

Һүҙемде тамамлап, билдәле Ҡытай реформаторы Дэн Сяопин бойомға ашырған үҙгәрештәргә метафорик нигеҙ булған бер лозунгыны иҫегеҙгә төшөрәм: "Йөҙәрләгән гөл сәскә атһын әйҙә!" Ысынлап та, хәҙерге заман Ҡытай дәүләтенең сәскә атыуын ваҡытында ғәмәлгә ашырылған мәғрифәти һәм фәнни-технологик үҙгәрештәрҙән башҡа бер нисек тә аңлатып булмаҫ ине, тигәнгә ишара булды был һүҙҙәр.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ЯҢЫСА ЙЫЛМАЙ



Яңы һүҙе, ғәҙәттә, һағайта. Һағайта, тигәс тә, ҡурҡытмай, күңелде ниндәйҙер таныш булмаған хистәр ҡытыҡлай башлай, һәр саҡ эргәбеҙҙә йөрөгән йәшәүгә көс биреүсе өмөт саҡҡылары сағыуыраҡ балҡый башлай.

Яңы бит! Әле таныш түгел, ымһындырғыс! Донъяға яңы тыуған бала кеүек! Күпме өмөттәр бағлайбыҙ сафтан-саф, нур бөркөп торған бала күҙҙәренә ҡарап. Имен-һау йәшәүен, бөтә тән ағзаларының да теүәллеген, аңы камил булыуын теләйбеҙ. Яңы йыл алдынан да шундайыраҡ хистәр солғап алмаймы ни?..

Балаларса сабырһыҙ көтһәң дә, тыштан битараф күренһәң дә килә ул Яңы йыл! Ҡаршы ал, яңыса йылмай! Һин йылмайһаң, ул да йылмайыр...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

## РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!



**Бәләкәй саҡта өләсәйемдең "Йәшәй-йәшәй тормош өйрәтә ул, балам", тигәнен аңларлыҡ йәшкә күптән еткәнмен инде. Бына шулай йәшәй-йәшәй төшөнгән иң кәрәкле сифат - яҡындарыңа, тормошҡа рәхмәтле була белеү.**

Донъя көткәндә төрлө хәлдәр була - яҡшыһы ла, яманы ла, тигәндәй. Йәшерәк саҡта һәр яңылыҡты йә осоп-ҡанатланып, йә бөтөнләй күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп ҡаршы алынһа, йылдар үтеп, йәш арткан һайын һәр яңылыҡты тынысыраҡ ҡабул итергә өйрәнәһең. Үткәндәргә ҡарап ниндәйҙер ҡарарҙарың төптө хата булғанлығын аңлайһың, ҡайһы бер эштәреңде башҡарғанда ныҡышмаллыҡ етмәгәненә төшөнөүҙән күңел болоҡһой, тормошҡа ашмаған хыялдарыңды уйлап, эс боша. Ләкин үкенестәр менән йәшәүҙән фәтүә юҡ, булған-үткәндәрҙән фәһем алаһың да артабан йәшәйһең. Шулай ҙа шатланып-ҡыуанып йәшәгән мәлдәр барыбер ҙә күберәк. Уйлап ҡараһаҡ, йәшәр йортобоҙ, ашар ашыбыҙ, кейер кейемебеҙ бар. Туғандар янда, балалар ҡыуандырып тора. Нисек итеп ошондай тормошҡа рәхмәтле булмаҫҡа мөмкин?

Ирем менән дүрт бала тәрбиәләйбеҙ. Олоһона 17 йәш тула, иң кесеһе 6 йәшен тултырып, янда тупылдап йүгереп йөрөй. Көн дә ошондай бәхетле тормошома рәхмәттәр уҡып йәшәйем. Ауылда эш юҡ тиерлек, ләкин ҡул эш рәтен белһә, ялҡаулыҡҡа хужа булғанда, яҡшы тормош көтөргә була. Беҙ ҙә ҡура тултырып мал аҫрайбыҙ, баҡса үҫтерәбеҙ. Етмәһә, дәүләт ярҙамы ла тос ҡына. Әлегә тиклем бер пособие ла алманыҡ, сөнки рәсми эшебеҙ юҡ ине. Уйланыҡ та, үҙмәшғүл булып теркәлеп, тейешле һалымдарын түләй башланыҡ. Һәм көҙ көнө пособие юллаған инек, шөкөр, ыңғай яуап алдыҡ. Уның өсөн дәүләткә рәхмәтлемен, сөнки үҫеп килгән балалар бар саҡта "тере" аҡсаны тотонор урыны табылып тора.

Быйыл йәй тәүге тапҡыр ситкә сығып ял итеп килдек. Дәүләт программаһына ярашлы, ял итеүгә тотонған аҡсабыҙҙың 20 процентын кире ҡайтарып алдыҡ. Ни күңел менән ошо проект өсөн рәхмәтле булмаҫҡа мөмкин, әлбиттә, рәхмәтлебеҙ. Хаҡлы ялдағы атай-әсәйем иһә "Башҡортостан оҙонғүмерлелеге" (Башкирское долголетие) программаһы аша Яҡтыкүлгә барып, тау үренә күтәрелеп, аквапаркта булып, Башҡортостаныбыҙҙың хозур тәбиғәтендә ял итеп ҡайтты. Йөрөп ҡайтыуҙарына бер йыл, ә улар әле булһын ошондай ял ойоштороусыларҙы рәхмәт һүҙҙәре менән телгә алып, хәтерҙәренә төшөрөп кенә торалар.

Үҙебеҙ Мәләүездә, ә баш ҡалаға юл төшөп кенә тора. Арып-талып юлда йөрөгән кеше хәлен тик үҙе юлсы булған ғына аңлайҙыр. Өфө төҫлө уттары менән ҡаршы алып торһа ла, барып төртөлөр урының булмаһа, ул ҡырыҫлығын "һә" тигәнсә күрһәтер. Бына беҙҙең баш ҡалала баш терәр урыныбыҙ - ҡустым менән киленем. Ҡасан килһәк тә, нисә кеше барып инһәк тә йөҙ бормай, һүҙ тейҙермәй, асыҡ күңел менән ҡаршы алалар. Ҙур ҡалала аңын-тоңон аңламаған кешеләрҙе үҙ машиналарында йөрөтөп, бөтә мәсьәләләрҙе лә хәл итешеп, һыйлап ҡайтарып ебәрәләр. Балалар ҙа һәр каникулда барып, ял итеп ҡайта уларға. Беҙ генә түгел, тыуған ауылымдан барған һәм туҡтар урыны булмаған бик күптәр уларҙа туҡталҡа таба. Шуға күрә беҙҙең ғаилә генә түгел, ә тотош ауылыбыҙ менән рәхмәтлебеҙ уларға. Имен-һау ғына торһондар.

Һанай китһәң, рәхмәтле булыу өсөн күп сәбәптәр бар, бары тик уларҙы күҙ уңынан ысҡындырмайынса йәшәргә кәрәк. Рәхмәт алған кеше генә түгел, ә рәхмәт һүҙҙәре әйтә белгән кеше лә йылы тойғолар кисерә бит ул. Шуға күрә, һәр кемебеҙ рәхмәтле була белеп, үҙебеҙ ҙә рәхмәт һүҙҙәренә лайыҡ булып йәшәйек, дуҫтар.

**Рәйлә ҺАҒЫНБАЕВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Хөкүмәте 2023 йылға эшһеҙлек буйынса пособие күләмен билдәләне. Уның максималь күләме элекке кимәлдә ҡала - 12 792 һум. Пособиеның минималь күләме 1,5 мең һум кимәлендә һаҡлана. Башҡортостанда 2022 йылда эшһеҙлек буйынса пособиеның минималь күләме (төбәк компонентын иҫәпкә алып) 1 725 һум тәшкил итә. Максималь лимит - 14 710 һум.

✓Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы "Бәләбәй" сауҙа комплексы" йәмғиәтен "Бәләбәй" йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһе резиденттары реестрына индерҙе. Компания Бәләбәйҙә помидор һәм ҡыяр үҫтереү буйынса теплица комплексы төҙөлөшөнә 350 миллион һумдан ашыу инвестиция һалырға ниәтләй. Комплекстың майҙаны - 1 гектарға яҡын. Теплица хужалығының йыллыҡ проект ҡеүәте - 2 200 тонна продукция. 2026 йылда ошо ҡеүәткә сығыу, 24 эш урыны булдырыу күҙаллана.

✓Рәсәй хеҙмәт министры белдереүенсә, 2023 йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән пенсионерҙарҙың пенсиялары 4,8 процентҡа индексацияланасаҡ. Ғәмәлдәге ҡануниәт буйынса индексация ғинуарҙа һәм июндә күҙаллана. Былтырға ошо осор менән сағыштырғанда дөйөм үҫеш 15,3 процентҡа етә.

✓Башҡортостан һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыу өсөн 84 млн 136,8 мең һум федераль аҡса ала. Был турала бойороҡҡа Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Был аҡсаға ауыл, ҡала тибындағы ҡасаба һәм бәләкәй ҡалалар өсөн медицина ҡорамалдары менән махсус автомобилдәр һатып алынасаҡ. Аҡсаның бер өлөшө ФАП һәм табип амбулаториялары урынлашасаҡ тиҙ төҙөлөшлө модулле конструкциялар, профилле учреждениеларҙы төҙөкләндереүгә тотоноласаҡ. Бындай ярҙам Рәсәйҙең 46 төбәгенә бүленгән.

✓Башҡортостан дәүләт учреждениелары мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡы әлеге ваҡытта 46 мең һум тәшкил итә. Был турала Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа, "Мәҙәниәт" милли проектының үтәлешен контролдә тотоу буйынса эшсе төркөм ултырышында республиканың мәҙәниәт министры урынбаҫары Гөлдәр Хәмитова хәбәр итте. Волга буйы федераль округында мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы кимәле буйынса Башҡортостан уртасалар рәтендә, тип өҫтәне мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Наталья Лапшина.

*ҠЫҪҠАСА*

# ХАҠТАР АРТМАЙ ӘЛЕ

**2024 йылдың июленә тиклем торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡ арттырылмай.** 2022 йылда Рәсәй Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, Башҡортостанда ла торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡ ике тапҡыр - 1 июлдән һәм 1 декабрҙән арттырылды. Шуға күрә федераль кимәлдә 2024 йылға тиклем торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡты күтәрмәскә хәл ителде. Был хаҡта "Башинформ" агентлығында журналистар менән осрашыуҙа республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Бурдюк хәбәр итте. "Рәсәй Иҡтисади үҫеш министрлығының социаль-иҡтисади үҫеш прогнозында 2023 йылда коммуналь хеҙмәттәргә тарифты индексациялау 0 процент тәшкил итә тип яҙылған. 2024 йылдың июленән генә тарифтар үҙгәреүе көтөлә", - тине республика ведомствоһы етәксеһе.

✓ **Дәүләт Думаһы депутаттары хәрбиҙәргә һәм уларҙың балаларына ярҙам күрһәтеү, вузда уҡырға йыйылған махсус хәрби операция геройҙары өсөн квоталар индереү тураһында закон ҡабул итте.** Төҙәтмәләр ҡабул ителгәндән һуң илебеҙ университеттарында ҡабул итеү кампанияһы сиктәрендә һөнәр әҙерләү йүнәлештәре буйынса 10 процентлыҡ махсус квота булдырыла, шул рәүешле Рәсәй Геройҙары һәм өс Батырлыҡ ордены менән бүләкләнгәндәр вуздарға һынауһыҙ уҡырға инергә мөмкин. Ошо уҡ закон менән хәрби хәрәкәттәр зонаһында йәрәхәтләнгән, ғәрипләнгән һәм контузия алған хәрбиҙәрҙең балаларын университетҡа өҫтөнлөклө тәртиптә уҡырға алыуға 10 процентлыҡ квота индерелә. "Был Президенттың хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең балаларына ярҙам буйынса указы сиктәрендә әҙерләнгән бик мөһим сара булып тора", - тине Дәүләт Думаһының Фән һәм юғары белем биреү комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Александр Мажуга.

✓ **Башҡортостанда ҡан донорҙарына социаль ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән закон проектын әҙерләйҙәр.** Дәүләт Йыйылышының Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты ағзалары уларға йыл һайын бишәр мең һум аҡса түләргә тәҡдим итә. Тейешле закон проекты беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгән. Түләүҙәр тәртибен Башҡортостан Хөкүмәте билдәләй. Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев билдәләүенсә, ҡан донорҙарына социаль ярҙам саралары федераль кимәлдә ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Федерацияһының айырым субъекттары өҫтәмә төбәк сараларын билдәләне. "Башҡортостанда даими рәүештә ҡан биргән 160-тан ашыу кеше иҫәпләнә, - тине Константин Толкачев. - Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, законды ғәмәлгә ашырыуға республика бюджеты сығымдары йылына 815 мең һум булыр тип көтөлә. Ҡан донорлығы - бик мөһим хәйриә төрө. Һәр процедура - ҡотҡарылған ғүмерҙәр ул. Донорлыҡ һаулыҡ өсөн хәүефһеҙ. Унан да бигерәк, фән даими ҡан биреүҙең һаулыҡҡа яҡшы тәьҫир итеүен раҫлаған".

*ХУШЛАШЫУ*

**Башҡортостан Республикаһы халҡы Беренсе Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовты һуңғы юлға оҙатты. Шәхес менән хушлашыу "Башҡортостан" дәүләт концерт залында иртәнге сәғәт 9-ҙа башланды. Мәрхүм менән хушлашырға шәхестең арҡаҙаштары, коллегалары ғына түгел, ябай халыҡ, баш ҡаланың һәм республиканың төрлө предприятиеларының хеҙмәт коллективтары вәкилдәре килде. Иртәнге 8-ҙән үк саҡрымға еткән сират һуҙылды.**

# ҺУҢҒЫ ЮЛҒА ОҘАТТЫЛАР



Көндөҙгө сәғәт 12-лә Башҡортостандың Беренсе Президенты иҫтәлегенә матәм митингыһы башланды. Уны асып, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев мәрхүмдең хәләле Луиза Ғәлим ҡыҙына, яҡындарына ҡайғы уртаҡлашыу һүҙҙәрен еткерҙе, Мортаза Ғөбәйҙулла улының тормош юлының төп мәлдәренә туҡталып, уның тотош дәүер әһәмиәтенә эйәлеген билдәләне. "Тарихты тамырынан үҙгәрткән 90-сы йылдар ваҡиғалары Башҡортостандың Беренсе Президенты исемен яңы Рәсәй тарихына сағыу дәүләт һәм сәйәси эшмәкәр булараҡ мәңгелеккә яҙҙы", - тине ул.

Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров та Мортаза Рәхимовтың бар ғүмерен Башҡортостан халыҡтары мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүгә бағышлаған киң ҡарашлы шәхес, гражданин һәм кеше, етәксе һәм лидер булыуын, республиканы иҡтисади ҡеүәтле төбәккә әйләндереү өсөн ныҡлы нигеҙ һалыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уның дәүер символы, башҡорт халҡының бөйөк улы булыуын билдәләне. "Мортаза Ғөбәйҙулла улы ҡаҡшамаҫ абруй яулаған һәм бер үк ваҡытта ябай, ер кешеһе булып ҡала алған ысын лидер. Уны күпселек төбәк етәкселәре ихтирам итте, уны сәйәси лидер, аҡыллы аҡһаҡал тип баһаланылар һәм һәр саҡ уның фекеренә ҡолаҡ һалдылар. Бөгөн мин Мортаза Ғөбәйҙулла улы алдында крайҙы, Рәсәйҙе һаҡлап ҡалғаны, Башҡортостанды Рәсәйҙең алдынғы, абруйлы субъектына әйләндергәне, ныҡлы иҡтисад һәм кешеләр тураһында хәстәрлеге, туған телдәрҙе, мәҙәниәт, рухиәтте бөтөн күңеле менән ҡәҙерләгәне өсөн баш эйәм. Беҙ һеҙгә ярҙамығыҙ, аҡыллы кәңәштәрегеҙ, ышанысығыҙ өсөн рәхмәтлебеҙ. Һеҙҙән күп нәмәгә өйрәндек һәм әле лә ысын кеше, илһөйәр, профессиональ һәм зирәк етәксе булырға өйрәнәбеҙ. Һис һүҙһеҙ, эшегеҙҙе дауам итербеҙ", - тине Радий Фәрит улы.

Башҡортостан Республикаһының Беренсе Президентының вафаты айҡанлы субъекттар башлыҡтарынан, ябай граждандарҙан ҡайғы уртаҡлашыу телеграммалары килә. РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенконың телеграммаһында түбәндәге юлдар бар: "Бар көсөн халыҡҡа һәм Ватанға тоғро хеҙмәт итеүгә бағышлаған һирәк һөнәри һәм шәхси сифаттарға эйә кеше, билдәле дәүләт эшмәкәре китте. Мортаза Ғөбәйҙулла улы тыуған республикаһы мәнфәғәтендә эшләне, уны үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе, төбәктең иҡтисади һәм социаль өлкәләрен яңы кимәлгә сығарҙы. Ул принципиаллек, һынмаҫ рух, иң ҡатмарлы шарттарҙа ла юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеү һәләте, намыҫлылыҡ, тынлай һәм борсола белеү, мохтаждарға ярҙам итергә тырышыу сифаттарына эйә булды. Яҡташтары һәм коллегалары хәтерендә Мортаза Ғөбәйҙулла улы йөрәгендә һәр кемгә урын табылған һәр саҡ аҡыллы, зирәк, компетентлы сәйәсмән, ысын остаз булып ҡалыр. Уның изге эштәре һәм ҡаҙаныштары бер ваҡытта ла онотолмаҫ".

Шулай уҡ матәм митингыһында Татарстан Республикаһы президенты Рөстәм Миңнеханов та ҡатнашып, шәхсән һәм татарстандар исеменән ҡайғы уртаҡлашыу һүҙҙәрен еткерҙе. Уның китеүе Башҡортостан өсөн генә түгел, Татарстан өсөн дә оло юғалтыу булыуын билдәләне.

Мортаза Ғөбәйҙулла улының арҡаҙашы, Татарстан Республикаһы Президентының кәңәшсеһе Минтимер Шәймиев оҙаҡ йылдар бергә эшләүҙәре, ярышыуҙары, бер-берейенең уңыштарынан көнләшеүҙәре, бәхәсләшеүҙәре, әммә һәр саҡ уртаҡ тел табыуҙары тураһында һөйләне, ике республиканың Рәсәйҙе үҫтереүгә һәм нығытыуға, уның сәйәси йүнәлешенә индергән өлөшөнөң ниндәй баһаға эйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Протокол буйынса сығыш яһаусыларҙың һәр ҡайһыһы Мортаза Рәхимовтың абруйлы шәхес, башҡорт халҡының бөйөк улы булыуына баҫым яһаны, уның республиканы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яңы социаль-иҡтисади кимәлгә сығарыуын, республика өсөн генә түгел, Рәсәй өсөн эре хужалыҡ етәксеһе булыуын билдәләне.

Сара һуңында Рәсәй мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин сығыш яһап, Мортаза Ғөбәйҙулла улының традицион конфессияларҙы һаҡлау һәм үҫтереү өсөн дә ҙур эш башҡарыуын белдерҙе. Быны сараға барлыҡ конфессия етәкселәренең килеүе лә раҫлай. Ә инде мәрхүмде ошондағы имамдарҙың барыһы бергә Ҡөрьән-Кәрим аяттары уҡып оҙатыуы үҙенә урын тапмай үрһәләнгән күңелдәрҙе бер аҙ тынысландырғандай булды...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Мортаза Рәхимов менән хушлашырға Рәсәй Президенты Владимир Путиндың килеүе, уның Башҡортостандың Беренсе Президентының табуты эргәһендә туҡтап, баш эйеүе - бөйөк шәхес алдында ғына түгел, ә ошо шәхесте донъяға килтергән, тәрбиәләгән, үҫтергән халыҡ һәм республика алдында баш эйеү, уға хөрмәтен белдереүе кеүек ҡабул ителде...**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев 2022 йыл һөҙөмтәләре буйынса Волга буйы федераль округы субъекттары баш ҡалалары етәкселәре рейтингында лидерҙар рәтенә инде. "Медиалогия" бойондороҡһоҙ тикшеренеү компанияһы белгестәре төҙөгән был рейтингта ул өсөнсө урында. Былтырғы йылда Өфө башлығы тураһында яҡынса 89 мең хәбәр баҫылған. Медиарейтингҡа барлығы 28 етәксе ингән.

✓Яңы йылдың тәүге ун көнөндәге ҡаты һыуыҡтар яңы рекордтар ҡуйҙы. Мәҫәлән, Өфөлә 10 ғинуарҙа Дим метеостанцияһында термометр бағанаһы - 39-ҙы күрһәтте. Быға тиклем 1940 йылдың 10 ғинуары иң һыуыҡ көн иҫәпләнә ине, ул ваҡытта - 38,4 градус була. Ҡала үҙәгендә һауа температураһы - 34,3 градусҡа түбәнәйҙе.

✓21 ғинуарҙан Өфөлә экологик акция старт ала. Ҡалала ҡуйылған 12 майҙансыҡтағы махсус контейнерҙарға ҡала халҡы Яңы йыл шыршыларын ташлай ала. Уларҙың исемлеге ҡала хакимиәте сайтында баҫылған. Бынан тыш, Ленин районы буйлап "Шыршымобиль" йөрөйәсәк, унда шыршыларҙы тапшырып, ҡышҡы уйындарҙа ла ҡатнашып буласаҡ. 21 ғинуарҙа 12.00-нән 16.00-ға тиклем арауыҡта бөтөн пункттарҙа ла шыршығыҙҙы мандаринға алыштыра алаһығыҙ. Халыҡтан йыйылған ҡупшыҡайҙар махсус заводтарға оҙатыласаҡ һәм артабан төҙөлөштә, ишек, мебель етештереүҙә ҡулланыласаҡ.

✓М. Төхвәтшин исемендәге һуҡырҙар өсөн Башҡортостан республика махсус китапханаһында Тәскирә Даянованың "Ағинәй юлы" тип аталған яңы китабын Брайль шрифтында баҫтырып сығарҙылар. Башҡорт телендәге был китап балалар өсөн тәғәйенләнгән. Изгелек менән яуызлыҡ, эскерһеҙлек менән мәкерлек кеүек темаларҙы яҙыусы үҙ геройҙарын тигеҙ йәки был ваҡиғалар уртаһына ҡуйып, үҙенсә аса.

✓Өфөлә "ФИЗРА-Д спорт үҙәге" физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөлөшө башланырға тора. Спорт объекты өсөн 9-сы спорт мәктәбенең физкультура-һауыҡтырыу комплексы урыны һайланған. Өфө хакимиәте инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу барышында концессия килешеүе төҙөнө. Килешеүгә ярашлы, яңы "ФИЗРА-Д спорт үҙәге" физкультура-һауыҡтырыу комплексын файҙаланыу ваҡытын бүлеү графигы ҡаралған. Объект төҙөлөп бөткәс, мәктәпкә күнекмәләр өсөн ваҡыт бүленергә тейеш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХӘРБИҘӘР МЕНӘН ОСРАШЫУ



**Башҡортостан Башлығы Яңы йыл байрамы алдынан махсус хәрби операция зонаһында башҡорт ирекле батальондары яугирҙары һәм республиканан мобилизацияланғандар менән осрашты.**

"Хәрбиҙәр менән осрашыуҙан оло ихтирам тойғоһо менән ҡайтып килəм. Яугирҙарыбыҙға сираттағы гуманитар йөк алып барҙыҡ. Техника ла бар. Шулай ҙа иң ҡәҙерлеһе - өйҙән килгән хаттар, туғандары, яҡындары ебәргән посылкалар", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Донбасҡа эш сәфәре барышында Радий Хәбиров Донецк Халыҡ Республикаһы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Денис Пушилин менән төбәк-ара хеҙмәттәшлек мәсьәләләрен дә тикшерҙе. Былтыр республика үҙе шефлыҡ иткән Красный Луч ҡалаһында 46 объектты ремонтлаған, быйыл да эштәр дауам итәсәк. Красный Лучта Башҡортостан табиптары бригадаһы эшләй. Республика Донбасҡа бөтәһе 33 гуманитар йөк ебәргән, улар Луганск Халыҡ Республикаһында йәшәүселәр, шулай уҡ махсус хәрби операция сиктәрендә үҙ бурысын үтәүсе хәрбиҙәргә - М. Шайморатов, А. Доставалов, С. Юлаев исемендәге башҡорт батальондарына тәғәйенләнгәйне.

Радий Хәбиров шулай уҡ Луганск халыҡ республикаһының Петровское ҡалаһында Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлегәле Шайморатов исемен йөрөткән 22-се урта мәктәптә булды.

# ЙӘШТӘР ҺӨНӘРЛЕ БУЛҺЫН

**Өфөлә Һөнәри белем биреү тармағын яңыртыу һәм хеҙмәт династиялары йылына йомғаҡ яһалды.**

Республика Башлығы Радий Хәбиров, һөнәри белем биреү буйынса совет ултырышын асып, бөгөн предприятиеларҙың квалификациялы эшсе кадрҙарға ихтыяжы артыуын билдәләне. Республика "Ростех" дәүләт корпорацияһы менән корпорация предприятиелары өсөн кадрҙар әҙерләү сифатын арттырыуға йүнәлтелгән стратегик партнерлыҡ тураһында килешеү төҙөнө, тине Радий Хәбиров. Был урта һөнәри белем биреү системаһын һәм республика сәнәғәтенең төп тармаҡтарын нығытыуҙа ҙур аҙым булып тора. "Һуңғы йылдарҙа һөнәри белем биреү системаһын яңыртыу өсөн байтаҡ эштәр башҡарылды. Өс йылда 60 колледжда 188 заманса оҫтахана астыҡ. Берләшкән двигателдәр эшләү корпорацияһы - Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе өсөн уҡытыу-производство үҙәген сафҡа индерәбеҙ. Киләһе йылда республика өсөн өстөнлөклө булған химия, тау сеймалын табыу һәм машиналар эшләү тармаҡтары өсөн тағы өс ошондай кластер эшләй башлай. Бынын өсөн эре предприятиеларҙы ла йәлеп итербеҙ. Яңы профессиональ әҙерлек үҙәктәре асырбыҙ. Уларҙың береүһе - Учалы тау сәнәғәте колледжында. Медицина округтары принцибы буйынса медицина колледждарында филиалдар селтәре булдырылды", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Башҡортостанда колледждарҙы, шул иҫәптән сик буйындағы райондарҙа урынлашҡандарын капиталь ремонтлау программаһы башланды. Былтыр ярты миллиард һумға тиерлек 11 колледж ремонтланды. Дүрт йыл эсендә генә 90 колледждың биналарын һәм ятаҡтарын, Кадрҙарҙы йылдам профессиональ әҙерләү үҙәген ремонтлауға республика ҡаҙнаһынан 700 миллион һумдан ашыу аҡса бүленде. 2022 йылдан республикала иң яҡшы уҡытыусыларға һәм производствола уҡытыу мастерҙарына грант тапшырыла башланы (690-шар мең һумлыҡ 10 грант). Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, һәләтле студенттар өсөн стипендия һәм уның күләме арттырылды (107-нән - 150 кешегә тиклем 2300-ҙән - 4900 һумғаса). "Күп нәмә колледж директорҙарынан тора, әгәр улар муниципалитеттарҙың, профилле предприятиеларҙың аҡсаһын һәм федераль аҡсаны йәлеп итә алһа, республика һеҙҙең уҡыу йорттарын ремонтлауға киткән сығымдарҙы берлектә финансларға әҙер. Барлыҡ мәсьәләләрҙе бер йылда ғына хәл итеп булмай, әлбиттә, әммә ул уңышлы, ваҡиғаларға бай һәм һөҙөмтәле булды", - тине Радий Хәбиров.

# БАЛАЛАР БАҠСАЛАРЫНДА...

**Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2023 йылда республика ҡалаларында һәм райондарында балалар баҡсалары өсөн ата-әсәләрҙән түләү күләмен арттырыу тураһында ҡарар проектын сығарҙы. Документ ведомствоның рәсми сайтында баҫылған.**

Проектҡа ярашлы, Өфө ҡалаһында иң юғары хаҡ билдәләнә. Көнөнә иң күбе 166 һум тәшкил итәсәк, был 2022 йылға ҡарағанда 9 һумға күберәк. Икенсе муниципалитет - Өфө районы - 163 һум (2022 йылда 153 һум). Өсөнсө урында - Стәрлетамаҡ.

Бында максималь йыйым 159 һум тәшкил итәсәк (2022 йылда 150 һум). Иң түбән максималь йыйым 119 һум. Уны Башҡортостандың Шаран районында ҡуйыу планлаштырыла. БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, балалар баҡсаһында ата-әсәләрҙән түләү күләмен муниципаль берәмектәрҙең хакимиәттәре билдәләй. Ул Хөкүмәт указы менән билдәләнгән максималь сумманан юғары була алмай. Был норматив акт йыл һайын ҡайтанан ҡарала, ҡулланыусылар индексын иҫәпкә алып, ата-әсәләрҙән түләтеүҙең максималь суммаһы арттырыла (273-ФЗ-ның 65-се статьяһының 4-се өлөшө). Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда балалар баҡсаһына ата-әсәләрҙән түләтеүҙең бер өлөшө ғаиләләргә компенсация рәүешендә бирелә. Бер бала өсөн - 20 процент, икенсеһе - 50 процент, өсөнсө һәм артабанғы балалар өсөн - 70 процент. Инвалид балаларҙың ата-әсәләре, етем балаларҙың законлы вәкилдәре, шулай уҡ мобилизацияланғандарҙың балалары түләүҙән азат ителә. Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә һәм инвалид балалары булған ғаиләләргә 50 процент ташлама бирелә.

ҠЫҪҠАСА

# ҒАИЛӘЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА

✓ **3-7 йәшлек балаларға түләүҙәр өсөн Башҡортостанға өҫтәмә рәүештә 190 миллион һумдан ашыу аҡса бүленә.** Шулай итеп, ошо категорияға ҡараған ғаиләләргә түләүҙәр өсөн республика федераль бюджеттан 8 миллиард һумдан ашыу аҡса алырға тейеш. "Өҫтәмә финанслау кәрәклеге төбәктәрҙә аҡса алыусылар һанын асыҡлауға бәйле. Аҡса сығанағы - Хөкүмәттең резерв фонды", - тиелә Министрҙар кабинеты белдереүендә. Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән 3-7 йәшлек балаларға айлыҡ түләүҙәр өсөн төбәктәргә өҫтәмә рәүештә 3,3 миллиард һумдан ашыу йүнәлтелә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылда Рәсәй Президенты указы менән 3-7 йәшлек балаларға айлыҡ түләүҙәр индерелде. Ғаиләнең хәленә ҡарап, уларҙың күләме балаға йәшәү минимумының 50, 75 йәки 100 процентын тәшкил итергә мөмкин. Башҡортостанда пособиеның иң күбе - 11 747 һум. Пособие юллау өсөн дәүләт хеҙмәттәре порталында электрон ғариза бирергә, күп функциялы үҙәккә йәки социаль яҡлау органдарына мөрәжәғәт итергә була.

✓ **Яңы йылдан Рәсәйҙә хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме һәм йәшәү минимумы инфляциянан юғарыраҡ була, тип белдерҙе илдең хеҙмәт министры Антон Котяков Президент Владимир Путин менән балалы ғаиләләрҙең килеменә булышлыҡ итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмәлә.** "Ун процентлыҡ индексацияны иҫәпкә алып, минималь күләм 2022 йылдың 1 ғинуары кимәленә ҡарата - 16,9 процент, ә йәшәү минимумы 13,6 процентҡа арта. Йәғни йәшәү минимумы дәүмәле лә, МРОТ та көтөлгән инфляциянан юғарыраҡ була", - тине Антон Котяков. Был хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен арттырыуҙың икенсе этабы, тине ул. Уның һүҙҙәренсә, федераль бюджетта алдағы өс йылға минималь эш хаҡының үҫеш темпы йәшәү минимумы үҫешенән юғарыраҡ билдәләнгән һәм өс йыл йомғаҡтары буйынса айырма ун процентҡа етер тип көтөлә. Эшләп йөрөгән рәсәйҙәрҙең килемен арттырыу өсөн МРОТ менән йәшәү минимумы араһындағы айырманы әҙмә-әҙлекле арттырырға кәрәк, тип өҫтәне Антон Котяков. Министр әйтеүенсә, маҡсатлы йүнәлеш - 30 проценттан ашыу.

✓ **Башҡортостанда етем балаларға пособиелар 10 процентҡа индексацияланa, тип хәбәр иттеләр республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән.** Депутаттар 2005 йылдың 28 декабрендәге "Опекундарға (попечителдәргә) бала ҡарауға аҡса түләү тәртибе һәм күләме тураһында" республика законына тейешле үҙгәрештәр индерҙе. "Закон проекты 2023 йылдың 1 ғинуарынан етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы ҡарау өсөн айлыҡ пособиелар күләмен 10 процентҡа арттырырға тәҡдим итә, - тине Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. - Былтыр пособиелар арттырылманы, бынан алдараҡ индексация 4 процент кимәлендә башҡарылды". Республиканың Хеҙмәт министрлығы хәбәр итеүенсә, пособие өс йәшкә тиклемге сабыйға - 7 143 һумдан 7 857 һумғаса, өс йәше тулғандарға иһә 6 868 һумдан 7 555 һумғаса арттырыла. Үҫеш яғынан артта ҡалған балаларға пособиелар ҙа 10 процентҡа индексацияланa.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Кәбеҫтә

❖ Бөйән сей яраһы булғанда кәбеҫтә һуты ярҙам итергә мөмкин. Ярты баш кәбеҫтәне ит турағыста ваҡларға, шунан ике ҡат марля аша һутын һығып алырға. Кәбеҫтә һутын көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда ярты стакан эсергә. Уҡшытһа, ҡырын ятҡан килеш эсеп, ярты сәғәт урындан ҡуҙғалмаҫҡа. Был рәүешле дауаланғанда аҙлап ҡына ҡулланырға. Йәйләп күнел болғаныу үтә, ике ай дауаланғандан һуң хәл яҡшыра.

## Йүтәл

❖ Ҡаты йүтәлдән кәкүк баш (медуница лекарственная), юшан (вероника лекарственная), майағас (иссоп) үләндәренән эшләнгән төнәтмә ярҙам итә. Үләндәрҙе бер тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Килеп сыҡҡан әҙерләмәнең 1 ҡалағына 500 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәгә бал ҡушып, йылы көйөнсә көнөнә 4-5 тапҡыр 50-100-әр мл күләмдә эсергә. Хәл тиҙ яҡшырһа ла, кәмендә 10 көн шулай дауаланырға. Ғөмүмән, кәкүк баш һалҡын тейеүгә һәм үпкәгә бәйле ауырыуҙарҙың барыһынан да бик яҡшы ярҙам итә. Әммә эсәктәр атонияһы, юғары ҡан ойошоусанлығы һәм эс ҡатҡанда был үләндән эшләнгән дауаларҙы ҡулланыу тыйыла.

## Грипп

❖ 1 ҡалаҡ әремгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут һыу парында тоторға һәм һөҙөргә. Өскә бүлергә һәм ашарҙан 30 минут алда бал ҡушып эсергә.

❖ Ауырыу йөгөү ихтималлығын һиҙгәс тә һуған һәм һарымһаҡты көндәлек туҡланыуға индерергә кәрәк. Көнөнә 1-2 бүлкә һарымһаҡ, ҙур булмаған бер баш һуған да етә. Шулай уҡ сөгөлдөр, кәбеҫтә, кишер кеүек йәшелсә, емештәрҙе күберәк ашағыҙ.

❖ Грипп ауырыуын иҫкәртеү өсөн 1 литр ҡайнатып һыуытылған һыуға 5 процентлы йод тамыҙырға (6-8 тамсы ла етә). Яҡшылап болғатырға. 1 балғалаҡ аш тоҙо ҡушып, тағы ла болғатырға. Ошо әҙерләмәне уҫка ҡойоп, танауға һурырға, тамаҡты сайҡатырға. Был рәүешле бер юлы 3-4 тапҡыр таҙарынығыҙ. Ҡалған шыйыҡсаны эсеп ҡуйығыҙ.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Йәштәш ҡыҙҙар араһында үҙ эшен асыу теләгән ғаилә ҡороуҙан өҫтөнөрәк ҡуйыусылар күп булыуы - был да ҡыҙыҡлы бер күҙәтеүем. Бер әхирәтем утыҙҙан һуң ғына кейәүгә сығасаҡмын, ти.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Һаҡал

Бирҙеғолдан көнсығыштараҡ урынлашҡан Сәрмән ауылында эшләнгән һаҡалдың да үҙенсәлекле яҡтары бар. Шундайҙың бер матур өлгөһө хәҙерге көндә Фәйзуллина Луиза Йәүҙәт ҡыҙында һаҡлана. Һаҡал - 1913 йылда Сәрмән ауылында тыуған Мусина Бибиғәйшә Ғәҙелшә ҡыҙынан ҡалған ҡомартҡы. Үҙенсәлектәре тураһында шуларҙы әйтергә мөмкин: аҫҡы яғы түңәрәкләгән һаҡлай, тояҡһыҙ итеп эшләнгән. Нигеҙе - туланан; ҡыҙыл төҫтәге кизе-мамыҡ туҡыма менән тышланған. Тағыу өсөн ҡулайлаштырып



тегелгән яғаһы бар. Биҙәлешендә Рәсәй һәм сит ил аҡсалары, тимер сылбыр, ҡашлы биҙәүес, аҡыҡ пластиналар ҡулланылған. Селтәр өлөшөнөң уртаһында өсмөйөшкә оҡшатып тамға эшләнгән, аҫтында тояҡтары бар.

Әбйәлил районының ҡайһы бер ауылдарында таралған һаҡалдар ҙа бик үҙенсәлекле. Уларҙы халыҡ телендә "тамъян һаҡалы" тип атау ҡабул ителгән. Мәҫәлән, 1929 йылда тыуған һәм хәҙерге көндә Асҡар ауылында йәшәүсе Тутаева Сәрүәр Хәлил ҡыҙында һаҡланған ҡомартҡы уның әсәһе Ғәйниямалдан ҡалған. Яҡынса 1880 йылдар тирәһендә эшләнгән булырға тейеш. Башлыса, киндерҙән һуғылған туҡыма нигеҙле булған. Бары тик ваҡыт үтеү менән уны яңыртырға тура килә. Сәрүәр Хәлил ҡыҙы һаҡал тураһында һөйләгәндә түбәндәге атамаларҙы ҡуллана: 1. Муйынға таға торған өлөшө - иҙеү. 2. Мәрйендәр менән һырылған өлөшө - түш. 3. Тәңкәләрҙән торған дүрт горизонталь рәт -




ҡор. 4. Мәрйендән торған аҫҡы өлөшө - селтәр. 5. Иң аҫта бағаналап теҙелгән тәңкәле мәрйендәр - тояҡ. 6. Тояҡ тәңкәләре. Тимәк, был һаҡал алты өлөштән тора.

Сәрүәр Хәлил ҡыҙы шулай уҡ биҙәүестең асылы тураһында ла бик ҡыҙыҡлы һәм мөһим мәғлүмәт еткерә: һаҡал биҙәүес кенә түгел, ул нәҫел һәм быуындар билдәһе булып тора. Йәғни, ырыу ағасы тип тә әйтергә мөмкин. Өҫкө яғындағы тәңкәләрҙең төрлө яҡҡа тармаҡланып китеүе тап нәҫелдең быуындарын белдерә лә инде. Күреүебеҙсә, һаҡсыл ҡулдарҙа һаҡланыусы бай тарихлы биҙәүестәр бөгөнгө көндә лә үҙенең матурлығы менән күҙҙең яуын алып тора.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре"**
**китабынан.**

*ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ*

**Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетының киң мәғлүмәт саралары эшмәкәрлеге ҡыҙыҡһындырған йәштәре менән осрашып, уларҙың бөгөнгө һәм киләсәк тураһындағы уй-фекерҙәрен, йәмғиәттәге төрлө күренештәргә булған ҡараштарын белештек һәм "Бөгөнгө йәштәр ниндәй ынтылыш-хыялдар менән йәшәй?" тигән һорауға яуап эҙләнек.**

# ЮҠ, БЕҘ БЫУЫНДЫ ЮҒАЛТМАНЫҠ!



***Сулпан Вәлиева, Баймаҡ районынан:*** Хәҙерге заман йәштәре популяр булырға теләй. Күбеһененең һөнәре лә ошо төп ынтылыштарына бәйле: блогерлыҡ, социаль селтәрҙәр һәм интернет ярҙамындағы башҡа төр эшмәкәрлек ҡыҙыҡһындыра уларҙы. Көн дауамында офиста ултырып, йәки башҡа төр ауыр хеҙмәт менән аҡса табыуҙан баш тартырға, еңел эш менән күп аҡса алып йәшәргә теләүселәр ҙә бихисап. Арабыҙҙа шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә ниәт итеүселәр ҙә бар, ундайҙар баштан уҡ маҡсаттарына ирешер өсөн бөтә көсөн һала һәм миңә быны тап ошо сифатҡа эйә булған тиҫтерҙәрем оҡшай. Теләктәре ҡабул булһын өсөн ҡул ҡаушырып ултырырға ярамағанлыҡты аңлайҙар һәм тырышалар. Әммә ҡайһы берҙә эш һәм юғары уҡыу йортонда белем алыуҙы бер юлы алып барырға теләп, уҡыуҙы икенсе планға ҡуйыуҙары ғына дөрөҫ түгел, минеңсә. Һөҙөмтәлә, уҡыуҙы ташлап ҡуйыуҙары ла, йәки ваҡытлыса тип урынлашҡан эштәрендә университетты тамамлағандан һуң бөтөнләйгә ҡалыуҙары ла ихтимал. Ә бит юғары уҡыу йортона ҡасандыр үҙе теләп уҡырға ингән, үҙләштерәсәк һөнәренә бәйле хыялы ла булғандыр. Аҡса табырға өйрәнеп алғас, шул хыялдарына хыянат итеүҙәре йәл...

Йәштәр иң тәүҙә уҡыһын, белем алһын ине ул. Өлкән быуын кешеләренә беҙҙең замандаштарҙыҡы кеүек яҡшы шарттар булмаған, барыбер уҡығандар. Быға күптәребеҙҙең ата-әсәләрен миҫал итеп килтерергә була. Юғары белемдең ҡәҙерен күп йәштәр белмәй, аҡса артынан сыға ла китә. Бәлки, ата-әсәһененең ярҙамын көтөп ултырырға теләмәгән, бигерәк тә ауыл еренән ҡалаға уҡырға килгән студенттарға стипендия күләмен арттырыу был мәсьәләне ыңғай хәл итергә ярҙамлашыр. Аҡса табам, тип, эшкә урынлашыу урынына, юғары стипендия алам, тип, тырышып уҡырҙар ине.

***Миләүшә Яхина, Әбйәлил районы:*** Бөгөнгө йәштәр араһындағы барлыҡ хәл-күренештәр Көнбайыштан килгән тенденцияларға бәйле. Уларҙың еңел аҡса эшләү, бай һәм матур йәшәү теләктәре лә интернет селтәрҙәрендә киң таралған видеоларҙы күреп, башҡаларҙың тормошона ҡарап ҡыҙығыуҙарына бәйле. Үҙҙәре уңышлы тип иҫәпләгән кешеләрҙе ҡабат-ҡабат ҡарайҙар шунан. Йәштәш ҡыҙҙар араһында үҙ эшен асыу теләгән ғаилә ҡороуҙан өҫтөнөрәк ҡуйыусылар күп булыуы - был да ҡыҙыҡлы бер күҙәтеүем. Бер әхирәтем утыҙҙан һуң ғына кейәүгә сығасаҡмын, ти. Тағы ла йәштәштәрем үҙ-ара һирәк аралаша, күптәре үҙенә йомолған, ҡулдарында телефон. Быны мәктәп уҡыусылары араһында ла күҙәтергә мөмкин, балалар урамға уйнарға ла сыҡмай. Нисек кенә буламаһын, кешегә кеше кәрәк бит. Шуны өлкәндәр ҙә аңлаһын, ғаиләләрендә аңлатып үҫтерһендәр ине.

***Юлдаш Мусин, Баймаҡ районы:*** Минең кеүек үк, күп кенә тиҫтерҙәремдең үҙ эшен асыу теләге ҙур. Беҙҙең факультетта белем алған егеттәр араһында ла университетта үҙләштергән һөнәрҙән тыш тағы ла үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған өлкәлә шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә хыялланған, ниәт ҡороп йәки тәүге аҙымдарын яһағандар күп. Мин үҙем дә күберәк аҡса эшләүгә ҡарағанда әлегә ҡыҙыҡһындырған эш менән шөғөлләнеү һәм бынан ҡәнәғәтлек кисереүҙе өҫтөн ҡуям. Әле тәүге аҙым яһау өсөн башланғыс капитал туплау маҡсатында эшләйем. Бизнес тип ынтылһаҡ та, матди байлыҡты ғына өҫтөн күргән быуын түгелбеҙ. Иман һәм рухиәтте лә үҙ итәбеҙ. Мин шиғырҙар яҙам, Шәйехзада Бабич ижадын бик үҙ итәм, ғәрәп телен өйрәнәм, донъяуи һәм дини белем алыуға берҙәй иғтибар бүләм.

Һәр егет-ҡыҙҙа тыйнаҡлыҡ булырға тейеш, ләкин хәҙерге заманда башҡорт егеттәренә ҡыйыулыҡ та ҡамасау итмәй. Уйлап ҡараһаң, бер нисә йыл элек кенә социаль селтәрҙәрҙә, ғөмүмән, интернетта башҡортса контент, башҡорт блогерҙары юҡ ине, ә хәҙер хатта аҡса эшләй алғандары бар. Мин бындай башҡорт йәштәрен хуплайым ғына. Улар интернет ҡолона әүерелгән, ваҡыттарын бушҡа үткәрә тип тә иҫәпләмәйем. Ҡалала йәшәгәндәрҙең, бәлки, оҙайлы ялдарҙа быға ваҡыты ҡалалыр, ә бына минең кеүек ауыл егеттәренә ундай форсат әләкмәй: әле бына утын ярырға сыҡтым, урманға барырғамы, мал һуғарып килергәме йәки башҡа төрлө эше сығып ҡына тора. Буштты бушҡа ауҙарып йәшәүҙе мин донъяға пессимистик ҡараштә булыуға тиңләйем һәм үҙ итмәйем. Төрлө яҡлап үҫешкә ынтылған, алдына маҡсаттар ҡуйып йәшәгән тиҫтерҙәрем күберәктер, тим. Башҡалар Башҡортостанға килеп үҙ эшен булдыра алғанда, беҙҙекеләр Себерҙә йөрөргә тейеш түгел. Ҡыйыуыраҡ булып, ошонда үҙ эшебеҙҙе асып, республикабыҙға һәм халҡыбыҙға файҙа килтереп йәшәргә кәрәк.

***Зилиә Буранбаева, Бөрйән районы:*** "Шәхси бренд" тигән төшөнсә бар, был йәмғиәттә бер кеше тураһында барлыҡҡа килгән таныулы образ тигәнде аңлата. Хәҙерге егеттәр-ҡыҙҙар бөтәһе лә үҙенең шәхси брендын булдырырға ашыға. Шулай уҡ йәш кеше меңәр һум түләп, ҡиммәтле тренингтар, курстар үтә икән, тимәк, киләсәге тураһында хәстәрләй һәм үҫешергә теләй. Беҙ үҙебеҙҙе аҡса йәһәтенән дә, хеҙмәт урынынан да ирекле тойорға теләйбеҙ. Күптәр балаларына ла киләсәктә шундай азатлыҡ тәрбиәләүҙе маҡсат иткән. Матди етешлек артынан ҡыуып, рухи яҡтан үҙҙәрен юғалтҡандар, тип тә әйтеп булмай йәштәштәрем тураһында. Улар илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр ҙә. Быны үҙем уҡыған университет студенттары миҫалында ла әйтергә мөмкин: саф башҡортса һөйләшкән, файҙалы эштәр атҡарырға тырышҡан, аҡыллы, халҡын хөрмәт иткән йәштәр уҡый бында.

***Рәлиә Ғөбәйҙуллина, Архангел районы:*** Ололарҙың йыш ҡына: "Йәштәр китап уҡымай", йәки "Йәштәр хәҙер тәртипһеҙ", "Йәштәр интернет ҡоло" тигәнерәк һүҙҙәр әйтеүен беләбеҙ. Улар "Беҙ улай булманыҡ", - тиҙәр. Ә беҙ шундай заманда йәшәүебеҙгә ғәйепле түгел, интернет, йәки башҡа йоғонтолар булмаһа, беҙ ҙә өлкән быуын кеүек булыр инек. Шулай ҙа интернет тик насарлыҡ сығанағы ғына түгел бит, аҡылы булған кеше уны үҙенә файҙаға әүерелдерә, шуның ярҙамында аң даирәһен киңәйтә ала. Өлкәндәр беҙҙе бушҡа-юҡҡа әрләп ташламаһын, аңларға тырышһын һәм кәңәш менән ярҙам итһен ине...

Мин университетҡа уҡырға ингәс, мәктәптә уҡығанға ҡарағанда әүҙемерәк була башланым. Сөнки мәктәптә уҡығандың һуңғы ике йылында уҡытыусылар тик Берҙәм дәүләт имтихандарында юғары балл йыйыу тураһында тылҡып торҙолар, башҡаға ваҡытыбыҙ ҙа ҡалмай ине. Хәҙер иркен тын алдыҡ. Шуға быйылғы Ҡуян йылында уҡыу йортонда үткәрелгән төрлө сараларҙа тағы ла әүҙемерәк ҡатнашырға, өлгәшемде яҡшыртырға, ваҡытлыса урынлашҡан эшемдә лә уңыштарға өлгәшергә өмөт итәм.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Яңы йылға - яңы өмөттәр бағлап торған йәштәрҙең тиҫтерҙәре тураһындағы фекерҙәрен дә, яҡты теләктәрен дә тыңлағандан һуң, күптәр кеүек "Был быуынды юғалтҡанбыҙ, шикелле" тип әйтергә тел әйләнмәй. Йәштәребеҙ аңлы, аҡыллы, киләсәктәрен дә ҡайғыртыусан икәненә тағы бер ҡат инандыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

✓ *Айырым алғанда, ҡыҫҡа акинак-ҡылыс менән йәйәүле стройҙа ғына, йә иһә дошманға бик яҡын тороп ҡына һуғышыу мөмкин була. 1 - 1,2 м оҙонлоғондағы ҡылыстар менән атта һыбай ултырған килеш алышып була.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Б.э. тиклем V быуаттан һуң Көньяҡ Уралдың дах-массагет ҡәбиләләрендә ике йөҙлө оҙон ҡылыстар киң таралыу таба. Был күренеш Евразия далалары күскенселәренең ҡоралланыуында һәм һуғыш тактикаһында етди үҙгәрештәр булыуы менән бәйле. Айырым алғанда, ҡыҫҡа акинак-ҡылыс менән йәйәүле стройҙа ғына, йә иһә дошманға бик яҡын тороп ҡына һуғышыу мөмкин була. 1 - 1,2 м оҙонлоғондағы ҡылыстар менән атта һыбай ултырған килеш алышып була. Уларҙың киң таралыуы һуғышта һыбайлы яугирҙар ҡатнашыуына дәлил булып тора. Был ғәскәрҙең хәрәкәтсәнлеген арттыра һәм алыҫ араларҙа уңышлы хәрби ғәмәлдәр алып барыу мөмкинлеген бирә.

Көньяҡ Урал далаларында оҙон ҡылыстар ҡулланыуҙың киң таралыуы ҡурғандарҙа күп кенә яңы формалы әйберҙәрҙең массовый рәүештә хасил булыуы менән тап килә. Мәҫәлән, әгәр б.э. тиклем VII - V быуаттар ҡурғандарында, ҡағиҙә булараҡ, ҙур булмаған яҫы төплө тупаҫ эшләнгән көршәктәр табылһа, оҙон ҡылыстар менән бер үк ваҡытта түңәрәк төплө, тура оҙон муйынлы көршәктәр хасил була. Ошо яңылыҡтарҙың масштаблы булыуын иҫәпкә алғанда, уларҙың ниндәйҙер ҡәүемдәрҙең яңы төркөмөнөң Көньяҡ Ҡаҙағстан йә иһә Урта Азиянан Көньяҡ Урал далаларына күсеп килеүе менән бәйле булыуы хаҡында фараз итеп була. Күрәһең, ошондай предметтарҙы етештереү күнекмәләрен көнкүрешкә һәм һуғыш ҡоралдарын әҙерләүгә тап улар индерә алған.

Көньяҡ Урал һәм Ҡаҙағстандың дах-массагет ҡәбиләләре мәҙәниәтендә урындағы шарттар менән бәйле билдәле бер үҙенсәлектәр бар. Улар иҫәбенә, мәҫәлән, киң аяҡлы, түңәрәк йә иһә дүрт мөйөшлө формалы, һарыҡ бәрәне йә иһә ат башына оҡшатып эшләнгән ҙур таш табаҡтар инә. Был табаҡтар үҙҙәренең бик ентекләп эшкәртелеүе менән айырылып тора. Улар, күрәһең, ритуаль характерҙағы әйбер булып, мотлаҡ билдәле бер маҡсатта файҙаланылған. Ошо табаҡтарҙың төбөндә ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡыҙыл буяу (охра), аҡбур, хатта көл ҡалдыҡтары табыла. Был уларҙа ҡояш илаһы хөрмәтенә изге ут тоҡандырылыуы йә иһә утты, ҡояшты символлаштырған буяу һөртөлөүе хаҡында фекер тыуҙыра. Ошо йәһәттән табаҡтарҙың бер үк ваҡытта ут алтары итеп ҡулланылыуы мөмкин.

Иртә тимер быуатында кеше, йәнлек һәм ҡоштар фигураларын сағылдырған, ҡатмарлы орнаменталь мотивлы декоратив-ҡулланма сәнғәте предметтары Евразия халыҡтары мәҙәниәтенең характерлы элементтарының береһе булып иҫәпләнә. Малсылар тормошо күренештәре боронғо рәссамдарҙың яратҡан мотивтарынан була: тарбаҡ мөгөҙлө боландар, һуғышыусы дөйәләр, ҡырағай ҡоштар һәм ҡырағай йәнлектәр, шул иҫәптән, үлән менән туҡланыусы хайуандарҙы, иң элгәре боландарҙы аулаусылар. Ошондай фигуралар һәм күренештәр һөйәктә, тимерҙә, алтында, күндә һынлана, улар һаҙаҡтарҙа, хәнйәр, ҡылыс йөҙҙәрендә, беләҙектәрҙә һүрәтләнә, йәғни ғәмәлдә барса тирә-йүндәге әйберҙәрҙә сағылыш таба. Ошондай предметтарҙың - "йәнлек" стилендәге сәнғәт әйберҙәренең - таралыу территорияһы бик киң: Үҙәк Азиянан Көнбайыш Европаға тиклем. Көньяҡ Урал территорияһы ла ситтә ҡалмаған: Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан һәм Урта Азия далалары менән бергә ул ошо сәнғәт барлыҡҡа килгән үҙенсәлекеле усаҡтарҙың береһе була. Евразияның малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе халыҡтарында "йәнлек" стилендәге предметтарҙың модала булыуына күп факторҙар сәбәп булып тора.



Ун икенсе һүрәт. Көньяҡ Урал күскенселәре ҡурғандарының иртә тимер быуаты материалдары: 1-3 - уҡ башаҡтары; 4, 8 - балсыҡ көршәктәр; 5,6 - акинак-ҡылыстар; 7 - һөйәк ҡалаҡ; 9, 12 - бронза көҙгөләр; 10, 11 - ҡылыстар; 13 - фаларҙар.

Иртә тимер быуатында хеҙмәт етештереүсәнлегенең артабанғы үҫеше нигеҙендә байлыҡ туплана, ул айырым ырыу-ҡәбилә төркөмдәренең һәм ғаиләләренең (аҡһөйәк-аристократтарҙың) ҡулына эләгә. Был конфликттар тыуҙыра, ошо ерлектә ҡәбиләләр, халыҡтар һәм дәүләттәр араһында һуғыштар көсәйә.

Унан башҡа, Евразияның малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбиләләренең йәшәү рәүеше яҡынайыуы менән, тормоштоң барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше характерын, халыҡтарҙың килеп сығышын һәм кеше тәртибенең әхлаҡи нормаларын сағылдырыусы, барыһы өсөн уртаҡ булған донъяға ҡараш формалаша. Ошондай ҡараштарҙың үҫеше үҙ халыҡтарының бәхетле тормошо хаҡына төрлө ауырлыҡтарҙы үтеп сығыусы батырҙар тормошо хаҡында героик эпостар тыуҙыра. Бындай үҙгәрештәр, көндәлек ғәмәли тормоштоң көс һәм көрәш, яуызлыҡ менән тулы булыуы айҡанлы, ошондай сифаттарҙы данлаусы сәнғәттә сағылыш таба.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# "ИРӘНДЕК АЙЫУЫ"

"Ирәндек айыуы" самородогының ауырлығы 4788,75 грамм, ул 930-сы келәймәлә. Уны 1992 йылда Баймаҡ районы "Ирәндек" совхозы механизаторы Р.И.Үтәғолов Ирәндек тауының көнсығыш итәгендә урынлашҡан Күсей ауылы эргәһендә, элекке Һунарүҙәк алтын руднигынан 2 километр алыҫлыҡта, ер һөргән сакта табып ала. Самородок 30 сантиметр тәрәнлектән һабанға эләгеп сыға.

Самородок тап ошо урында табылыуын аңлатҡан фаразға ярашлы, ул 1557 йылда башҡорттарҙың Иван Грозныйға хөрмәт йөҙөнән ебәрелгән алтын булырға тейеш. Юлда ылауға юлбаҫарҙар һөжүм итә, әммә оҙатып барған бер һаҡсы байлыҡты ергә күмергә форсат таба һәм ул шул килеш 400 йылдан ашыу ята.

Алтын киҫәге 1993 йылдан Башҡортостан Республикаһының Милли банкында һаҡланған һәм 2011 йылда Башҡортостан Республикаһының Милли музейына тапшырыла.



Алтын. Ауырлығы 4788,75 г 930-сы келәймәлә.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

60-сы гв. полкының 3-сө эскадронының пулемет взводы командиры ярҙамсыһы, өлкән сержант Тачмамед Ниязмамедов (Төркмән ССР-ы егете) үҙенең пулемет расчеты менән һәр саҡта ла алғы һыҙыҡта була. Бынан алдараҡ, 19 сентябрҙә Березна ауылына бәреп инеүсе яугирҙарыбыҙҙы пулеметының мәргән уты менән ҡурсалап тора. 28 сентябрҙә уның пулемет расчеты Нивки ауылына иң тәүгеләрҙән булып инә, дошманды утҡа тотоп, сигенергә мәжбүр итә. Һөҙөмтәлә эскадрон уңайлы позициялар алып өлгәрә. Ул 30 сентябрҙә Галки ауылы янындағы алышта, дошман контратакаһын кире ҡаҡҡан бер мәлдә, бер үҙе 10-дан ашыу немец һалдатын сафтан сығара. Батыр төркмән егете 1943 йылдың 14 ноябрендә Белоруссияның Гомель өлкәһе Речицкий районында барған алыштарҙа һәләк була. 1944 йылдың 15 ғинуарында Я.Ф. Антошинға, М.П. Нагорныйға, Т. Ниязмамедовҡа (үлгәндән һуң) Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

62-се гв. атлы полкының 3-сө эскадронында станковый пулемет наводчигы булған Михаил Новосельцев тәүҙә Клочково һәм Ивашковка (20 сентябрҙә), һуңынан Нивки ауылы өсөн барған алыштарҙа тәүәккәл һәм һис бер ҡурҡыу белмәй эш итә. Дошмандың Нивки ауылы ситендәге бер пулеметы һөжүмгә күтәрелгән яугирҙарыбыҙҙы утҡа тотоп, баш ҡалҡытырға ла мөмкинлек бирмәй. Батыр яугир, алға табан шыуышып барып, немецтарҙың ошо пулемет расчетын юҡ итә, ошо арала эскадрон Нивки ауылына бәреп инә, алға табан хәрәкәт итеү өсөн мөһим булған торлаҡ пунктын азат итеү өсөн юл асыла. Михаил Новосельцев Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

Беҙҙең атлылар артабан Вяле һәм Усохи ауылдары йүнәлешендә хәрәкәт итә. Дошман Вяле ауылын ҡаршылыҡ күрһәтеү үҙәгенә әйләндерә: һалдаттарын бындағы өйҙәргә, һарайҙарға, подвалдарға урынлаштырған немец командирҙары ныҡлы оборона тоторға иҫәп тота. Уларға ярҙам да килеп етә, немецтарҙың алышҡа ингән 7-се пехота һәм 12-се танк дивизиялары йыш ҡына контратакаға күсеп тә ҡарай. Улар ошо плацдармда барған алыштарҙа юғалтыуҙар кисергән совет частарынан һан яғынан да күпкә өҫтөн була. Етмәһә, беҙҙең 76-миллиметрлы артиллерия батареялары әле яңы ғына Днепр аша сыға башлаған мәл була, полктарҙа 45-миллиметрлы бәләкәй орудиелар менән генә дошман танкыларына ҡаршы торорға тура килә. Ошондай киҫкен шарттарҙа беҙҙең пулемет расчеттары ҡаһармандарса алыша.

60-сы гв. полкының 4-се эскадронының пулемет расчеты командиры, гв. сержанты Василий Бояркин (Ырымбур өлкәһе, Түлгән районы Ольшанка утарында тыуған) дошман оборонаһы рубежына яҡын уҡ килеп, засадала ята. Немец һалдаттары контратакаға күтәрелеү менән, уларҙың байтағын, пулеметынан мәргән утҡа тотоп, ҡырып һала. 30-ҙан ашыу немец һалдаты һәм офицеры юҡ ителә йә иһә яралана, ҡалғандары кирегә окопларына инеп боҫорға мәжбүр була. Шул мәлдә беҙҙең эскадрон атакаға күтәрелә, Вяле урамдарына бәреп инә. Немецтарҙың резервтан индерелгән көстәре яңынан контратака башлай. Василий Бояркин, һөжүм итеүселәрҙең флангыһына сығып, тағы ла пулеметынан ут аса, 10-дан ашыу дошманды йығып һала. Үҙе лә яралана, әммә пулеметын ташламай. Ул һуңынан, 1943 йылдың 12 декабрендәге алыштарҙың береһендә һәләк була, уға үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Вяле ауылы 28 сентябрҙә дошмандан азат ителә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙ бер ҡалыптан ғына ҡарап, донъяны тарайтабыҙ, йәштәр уға киңерәк ҡарай һәм үҙҙәренең күңеленә бөтөн донъяны һыйҙыра ала. Был яҡшымы, насармы - белмәйем. Шулай ҙа мин йәштәрҙе насар тимәҫ инем.*



**Яңы йыл алдынан үтеп барған йылдың ваҡиғаларын барлап, шәхси тормошоңа, уңыштарыңа баһа биреү, киләһе йылды фаразлау кеүек яҙылмаған ҡанун йәшәй йәмғиәттә. Шулай ҙа һуңғы йылдарҙа донъяла социаль, мәҙәни, сәйәси, иҡтисади өлкәләге әленән-әле һиҫкәндереп торған төрлө яңылыҡтар, пандемия фонында байрам кәйефе лә юғыраҡ халыҡта, былтырғы йылдың геополитик ваҡиғалары ла һәр кемебеҙҙең тормошона үҙенең әҙемтәләрен индерҙе. Бына ошондай ваҡытта образлы фекерләү аша халҡына, заманына оран ташлай, замандаштары күңелендә киләсәккә өмөт уята алырлыҡ шағир һүҙенә мохтажлыҡ тыуа. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - шағир, журналист һәм заманыбыҙҙың йәш кешеһе ошо йәһәттән үткән йылға ниндәй ҡараштә? Киләсәккә ниндәй көҫҙәр һәм өмөттәр менән баға? Ошолар хаҡында Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар һәм журналистар берлектәре ағзаһы, Башҡортостан Республикаһы Башлығының өлкән референты Алмас Рауил улы ШАММАСОВ менән әңгәмәләштек.**

### Йыл уңыштары

Былтыр бөтөн ил, тотош донъя өсөн ауыр йыл булды - йәшерен-батырыны юҡ, һәр беребеҙҙең ғаиләһенә, туғандарына, дуҫтарына хәҙерге заман еле ҡағылды. Йыл беҙгә кемдең кем икәнлеген дә күрһәтте. Ысын дуҫтарҙы, ысын дуҫ булмағандарҙы белдек, быға тиклем уйлап та ҡарамаған ҡайһы бер кешеләр тарафынан яһалған ниндәйҙер рухи батырлыҡтарға шаһит булта киләсәк тураһында йышыраҡ уйлайһың. Ижад йәһәтенән дә ҡараштар күберәк киләсәккә йүнәлтелгән.

### Киләсәк кешеһе образы

Башҡорт дәүләт университетында (хәҙер инде Өфө фән һәм технологиялар университетында) байтаҡтан уҡытам. Төп эшемдән бушағаныраҡ ваҡыттарҙа, кистәрен эшләргә тура килһә лә, йәштәр менән мәттәр өсөн хәүефлерәктәр ҙә. Шулай ҙа мин йәштәрҙе насар тимәҫ инем, студенттарға, мәктәп уҡыусыларына, хатта үҙемдең ике йәшлек улыма ҡарайым да, яңы быуынды күрәм. Мин уларҙа өмөтлө киләсәкте күҙаллайым. Йәштәр алдынғы ҡарашлы хәҙер һәм улар, минең уйымса, күпкә камилыраҡ, күпкә яҡшыраҡ тормош төҙөй аласаҡ. Бына ошо ышаныс миңә былтырғы йылдағы кисерештәрҙе үткәрергә ярҙам итте.

### Әҙәби тәнҡит кәрәк

Бөгөнгө көндә социаль селтәрҙәргә күсеп, үҙенең классик формаһын юғалта төшкән әҙәбиәткә тәнҡит күҙлегенән ҡарамайым. Халыҡ яратҡан

тип әйтеүҙәре бар. Шул уҡ ваҡытта, һәр кемдең тормошонда көн һайын осрап торған берәй ваҡиғаны 1-2 биткә һыйҙырып, матур тел менән тәфсирләп яҙып ҡуйһаң, 100 кешенең 90-ны унда үҙен күреп, йәки үҙе кисергән ошондай хәлде иҫенә төшөрөп, бик шәп яҙылған, тип әйтәсәк. Сөнки бөтөн кеше лә матур итеп яҙа алмай. Ҡайһы бер яҙыусылар шуға әүәҫләнеп, еңелләшеп китте. Альбом шиғриәте тигән төшөнсә бар, элек, мәҫәлән, һөйгән йәренә, дуҫыңа, туғаныңа яҙылған, йәки тәбиғәт күренештәрен һүрәтләп сыҡҡан һәм һиңә тиклем дә был турала йөҙҙәрсә ҡабат яҙылған ундай шиғриәтте матбуғатҡа биреп, сит кеше күҙенә күрһәтеү оят һанала торғайны. Шуға ла социаль селтәрҙә меңәрләгән уҡыусыһы булған кешене ысын яҙыусы тип әйтеп буламы икән? Телеграм каналда шиғырҙарҙы күҙәтеп барам һәм шуныһы ҡыҙыҡ: ҡайһы саҡта билдәле шағирҙың шиғырына ҡарағанда билдәһеҙ исемдең шиғыры тетрәндереп ҡуя. Быныһы ҡыуаныс, был йәһәттән социаль селтәрҙәр яңы исемдәр табырға ярҙам итә.

өлгөләрҙе әҙәбиәт итеп күрә башлаһаҡ, бер үк темаларға, идеяларға, сюжеттарға, геройҙарға ҡул сабып, бер урында тапанып торасаҡбыҙ һәм башҡа милли әҙәбиәттәрҙән күпкә ҡалыша барасаҡбыҙ. Беҙҙә яңы идеялар үҫешмәйәсәк һәм яңы генийҙар ҙа барлыҡҡа килмәйәсәк.

### Әҙәбиәт заманы түгел

Әҙәбиәттә таланттар бар ул, үҙенсәлекле яҙған кешеләр бар. Әммә шуныһы ҡыҙғаныс, уларҙың яҙышырға ваҡыты юҡ. Шул тиклем динамикалы заманда йәшәйбеҙ, тиҙ оҫҡос машиналармы ни - тегендәбында сабып йөрөйбеҙ, һәр кемдең ғаиләһе, балалары, эш урыны: бар ергә лә өлгөрөргә кәрәк. Ә күпме мәғлүмәт беҙҙе уратып алған, уның тулҡынында тирбәләбеҙ, һәр кешенең психикаһы быға түҙә алмай. Яҙыусы өсөн иң мөһиме - образға, темаға ныҡлап тотоноу өсөн үҙ фекерҙәрең менән тынысылыҡта ҡалыу. Бөгөнгө заман был шарттарҙы тыуҙыра ла алмай, сөнки быны өсөн һин телефоныңдан, компьютерыңдан һ.б арыныфға тейеш булаһың. Ни өсөн бөгөнгө көндә әҙәби процесс һүлпә-

# ЫСЫН ИЖАДСЫЛАРҘЫҢ...

## рухы азат булған, яңы Рәмиҙәрҙе тыуҙыра торған заман килеренә ышанам

дыҡ. Бына ошо йәһәттән дә йыл миңә мөһим булды, сөнки кешеләрҙең ысын йөҙөн, эске донъяһын асты. Был яҙыусы өсөн үҙе бер ваҡиға тип уйлайым, сөнки беҙ һәр ваҡыт кешеләрҙе, тормошто күҙәтәбеҙ һәм үҙебеҙгә геройҙар, сюжеттар, темалар, деталдәр эҙләйбеҙ. Ошолар бер әҫәр өсөн миңә тема бирҙе һәм әлеге ваҡытта драма өҫтөндә эшләйем.

Үҙемә килгәндә, былтыр 35 йәшем тулды. Элек тә донъяла барған процестарға, тормошҡа ҡарашымды белгәс, улар фекер йөрөтәһең, тип әйтә торғайнылар. Шулай ҙа 35 йәшкә тиклем йәшлек осоро булалыр, хәҙер бына үҙемде ярайһы тәжрибә туплаған, тормошҡа ҡараштары төрлөләнгән, яуаплыраҡ була барған бер кеше итеп тоям. Ошо йәһәттән мөһим булды йыл.

"Хушығыҙ!" - тиеп, шарт ябып ишекте,

Бүлмәмде ташлап йүгерҙе йәшлек.

Үткәнде һәм киләсәкте бүлгән стеналағы тишекте

Ямай алмай, аптыраным, интегеп:

Һыуыҡ иҫтәлектәр еле һаман торҙо шунан өрөп, -

тип яҙғайным элегерәк, ижадымдағы бер романтизм осоронда. Элек үткәндәр, ниндәйҙер хәтирәләр менән йәшәһәм, хәҙер иртәгәгә йышыраҡ ҡарай башланым: ул ниндәй булыр, замандар нисек килер икән? Атай булараҡ

аралашыу миңә бик ҡәҙерле тәжрибә. Мин уларҙы тағы ла яҡшыраҡ аңлай башланым, хатта үҙем өсөн яңынан астым кеүек. Беҙҙең йәш арабыҙ байтаҡ ҡына һәм миңә уларҙы тыңлауы һәм күҙәтеүе, уларҙың нимә менән ҡайнап йәшәүен аңларға тырышыу ысынлап ҡыҙыҡ.

Йәштәрҙең идеалдары, өҫтөн ҡуйған ҡиммәттәре минең өсөн ҙур асыш булды, ниһайәт, мин киләсәк кешеһенең образын күҙаллай башланым. Элек башлыса йәштәргә тәнҡит күҙлегенән баҡһам, уларҙың уҡыған китаптарын уҡып, ҡараған киноларын ҡарап, ниндәй социаль селтәрҙәрҙә ултырыуын, унда нимәләр яҙыуын, цифрлы технологиялар ҡулланып, нимәләр эшләүен күҙәтеп, ҡарашым үҙгәрҙе. Мәҫәлән, элек йәштәр китап уҡымай тип уйлай инем. Гәзит уҡымайҙар, әммә ҡайһы бер журналдарҙы, төрлө ил яҙыусылары китаптарын уҡыйҙар. Араларында миңә бығаса таныш булмаған философтар, социологтарҙың хеҙмәттәре бар, уҡып ҡарайым да, уларҙа ни тиклем фекер донъяһының ҡайнауын күрәм, был тормошто үҙгәртеп ҡороу буйынса ғәжәйеп ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр бар унда.

Беҙ бер ҡалыптан ғына ҡарап, донъяны тарайтабыҙ, йәштәр уға кинерәк ҡарай һәм үҙҙәренең күңеленә бөтөн донъяны һыйҙыра ала. Был яҡшымы, насармы - белмәйем, бәлки, традицион ҡим-



әҫәрҙәр ҙә, халыҡ яратҡан яҙыусылар ҙа була һәм халыҡ уларҙы үҙ кимәленән сығып ярата. Әйтәйек, Умберто Эконың интеллектуаль прозаһын социаль селтәрҙәргә һалһаҡ, әллә нимә яҙған ул, уҡырлыҡ та түгел, был яҙыусымы ул,

Башҡорт әҙәбиәтенә авторитеттарға ҡарамаған, шәп, абруйлы тәнҡитсе кәрәк. Әлегә яҙылған бар мәҡәләләр ҙә әҙәбиәт ғилемен генә хәтерләтә. Тәнҡитсе әҙәбиәткә һаҙлыҡҡа әйләнеп китмәҫкә ярҙам итеүсе кеше ул. Сөнки еңел-елпе

нәйгән тиһегеҙ, уның үҫеше өсөн шарттар әлегә юҡ.

Әйтәйек, күп йәштәрҙең торлағы юҡ, һәр ваҡыт, ҡалайтып аҡса эшләйем икән тип уйланып йөрөгәндән әҫәр тыумай. Бер эштә генә эшләп тә йәшәп булмай. Элек Яҙыусылар берлеге ағзаһы икәнһең, фатир биргәндә мотлаҡ эш кабинеты өсөн өҫтәмә бүлмә ҡаралған. Хатта рәссамдар, композиторҙар, яҙыусыларға бер йорттан фатирҙар бирелгән, үҙ-ара ҡайнашып йәшәүҙән яңы әҫәрҙәр тыуған. Ижад йорттары эшләгән, унда ижади мөхит булған. Яҙыусылар берлеген, мәҫәлән, мин Динис Бүләков етәкләгән замандан алып хәтерләйем. 4-5 йәшлек сағымда атайыма эйәреп бара торғайным. Коридорына ҡыҙыл балаҫтар түшәлгән, кабинеттарҙа кеше ҡайнап тора ине. Яҙыусыны күрергә теләгән бар кеше лә килә ала ине унда. Бөгөн керһәң, кеше лә юҡ, түбәнәнән һыу ағып тора тигәндәй. Ә улай булырға тейеш түгел. Был да әҙәби процестың ниндәй кимәлдә икәнен күрһәтеп тора.

Бөгөнгө ижадсылар - һәр беребеҙ үҙ алдыбыҙға. Социаль селтәрҙәрҙә барбыҙ, аралашып торабыҙ һымаҡ, бер-беребеҙҙе уҡып, фекерҙәрҙе лә әйтеп барабыҙ кеүек, әммә был рәүешле йәнле ижади мөхит тыуҙырып булмай. Шуның өсөн әлегә әҙәбиәт заманы, ижад кешеһенең ҡәҙерен белгән заман түгелдер, тейем.

## Усаҡ тоҡанасаҡ әле

Электән тарихты циклдар итеп ҡабул итәм, күтәрелеш осоронан һуң һүлпәнәйеү осоро, артабан тағы - күтәрелеш. Иҡтисад та шулай тулҡын һымаҡ бара ул, йә күтәрелә, йә аҫҡа төшә. Әлегә бына әҙәбиәттә төрлө урындарҙа осҡондар барлыҡҡа килгән осор, улар берҙәм булһа, берәй мәл дөрләп янған усаҡҡа әйләнеп китер ул.

Бала саҡты хәтерләһәм, Салауат Юлаев майҙанында шағирҙар сәғәттәр буйына шиғыр уҡыр, халыҡ эркелеп килер ине. Шундай шиғри һүҙҙең баһаһы күтәрелгән заман яңынан килер ул, тик ул икенсерәк булыр, бәлки. Йәштәрҙең ижадын күҙәткәндә күренә, улар яңы форма эҙләй: кемдер - виртуаль донъя аша, кемдер ниндәйҙер роликтар төшөрөп үҙенең уҡыусыһын таба. "Ҡош юлы" үҙе бер проект, ул да шул уҡ әҙәбиәт, шиғриәт. Уларҙың кимәле, әлбиттә, төрлөсә, әммә һәр береһе үҙенең ҡаҙанында ҡайнап торған ижади процесс. Йәмғиәт үҙенең кәрәкле бер нөктәһенә килеп терәлгәс, үҙенең нәфис һүҙгә һыуһағанын аңласаҡ. Ә әлегә кеше әҙәби процесты фон итеп кенә ҡабул итә, ихласлап тыңламай ҙа, ныҡлап әһәмиәт тә бирмәй. Кәрәге килгәс, уҡый ҙа, тыңлай ҙа башлаясаҡ, аңларға ла тырышасаҡ. Был йәһәттән киләһе йылдарҙа әҙәби процесс йәнләнеп китер тип уйлайым.

Бөтөн донъя өсөн яңы тарихи осор башланды, тип әйткәнек инде, ул осор, әлбиттә, еңел булмаясаҡ, ҡыҙғаныс ваҡиғалар ҙа булыр, дәүләттәр, кешеләр, ғаиләләр өсөн бик күп юғалтыуҙар ҙа буласаҡ. Бына шундай ысын ҙур көрсөк осоронда халыҡ ғәҙел, дөрөҫ, аҡыллы һүҙгә мохтажлыҡ кисерә, ысын йәмғиәт фекерен бөтөн донъяға еткерә алырлыҡ лидерҙар эҙләй башлай һәм уларҙы таба. Шундай һынылыш осоронда әлеге йәш талантлар үҙҙәрен асып ебәрерҙәр, тип ышанам. Шуға ла мин йәштәргә өмөтләнеп ҡарайым.

Былтыр мине ысынлап гәжәпләндергән тағы бер ваҡиға булды башҡорт мәҙәниәтендә. Ул режиссер Булат Йосоповтоң "Шағир көндәлеге" фильмы. Фильм, Рәми образы аша яңыры буласаҡ, тигән бер ниндәйҙер сигнал биргән һымаҡ булды киләсәккә. Шиғри һүҙ кәрәк кешеләргә, шиғри һүҙ менән дә донъяны үҙгәртә алам, ти шағир һәм үҙенең принциптарына мәңгегә тоғро ҡала. Был фильм ошо яңы килә торған йәштәрҙең, минеңсә, ниндәйҙер бер ауазы булып ҡабул ителә. Әйтерһең, ул киләсәктән килеп хәбәр итеп китте, кешеләр юғалып ҡалмағыҙ, өмөтһөҙ булмағыҙ, тип. Фильм аҙағында ҡояш күтәрелә, йәш Рәми самолетка ултырып, осоп киткәндә үҙең дә, әйтерһең, ошо самолет менән яңы тормошҡа осоп китәһең. Яңы килә торған замандың бер хәбәре тип ҡабул итәм был фильмды. Ысын ижадсыларҙың рухы азат булған, халҡына һүҙ әйтә торған, яңы "Табыныу"ҙы тыуҙыра торған, яңы ижадсыны бирә торған замандың.

## Һәр кеше уникаль

Йондоҙнамәгә лә, мөсәлдәргә лә ышанмайым һәм йылға уларҙан сығып пландар ҡормайым. Тормош иптәшем астрономия менән ҡыҙыҡһына, мин дә уның менән бергә йыһанға ҡағылышлы китаптарҙы уҡып барам һәм был донъяның ни тиклем ғәжәйеп икәненә хайран ҡалам. Унда астрологияға урын юҡ, йондоҙҙарҙы һанай башлаһаң, әллә ниндәй ҡеүәтле компьютерҙың да хәтере етмәйәсәк. Беҙ белгән йондоҙлоҡтар бер нисә генә, ә улар - меңәрләгән.

Донъяла 8 млрд кеше, тибеҙ, һәр береһе бер принциптан сығып йәшәһә, бик ҡыҙыҡ булыр ине. Күҙ алдына килтерегеҙ, был донъяла нисә миллион ҡуян, нисә миллион ҡыҫалалыр инде, йондоҙнамәлә яҙылғанса, уларҙың яҙмышы бер төрлө була аламы икән ни? Үҙем Ҡуян йылында тыуғанмын. Ҡуян булһынмы, уны бесәй йылы ла тиҙәр, был ике йәнлек тә миңә яҡын, уларҙы мин бик яратам, өйөбөҙҙә бесәй ҙә бар. Ҡуяндың ни тиклем аҡыллы икәнен һунарсылар, урмансыларҙан ишетеп беләбеҙ, ҡурҡаҡ түгел ул, кереһенсә, көслө, ҡыйыу. Ҡуян алыу еңел генә эш түгел, бының өсөн тәжрибәле һунарсы булырға кәрәк. Аҡыллы, ҡоролған ҡапҡандарҙы тойоп, урап үтә. Гел алға йүгерә һәм тиҙ йүгерә. Символик рәүештә мин быларҙы ҡабул итәм, тормошта ла ауҙарға әләкмәйенсә, ҙур тиҙлек менән алға йүгерергә тигән принциптан сығып, йылмайып ҡына ҡарайым. Бесәй ҙә ҡупшы, аҡыллы, уларҙы ятатһаң, улар ҙа кешене ярата белә. Өйҙәге йылылыҡты улар һаҡлап тора. Мин үҙем дә өй кешеһемен, миңә өйҙә, ғаилә менән рәхәтерәк, ошонан кинәнес табам.

Ә былай шуныһына инанғанмын: һәр кеше үҙенсә уникаль, бер кеше лә бер-береһенә оҡшамаған. Хатта нисә миллиард кеше булмаһын, ДНК-лар ҙа төрлөсә. Тәбиғәт бына шулай ғәжәйеп, аҡыллы. Кеше бер-береһенә оҡшамаһа, бер фекерҙә генә булмаһа, бер хис-тойғолар менән генә йәшәмәһә - кешелектең матурлығы һәм бәхете шундалыр. Бер ҡалыпҡа һалып үлсәһәк, ниндәй трагедияларға килтерәсәген аңлайбыҙ бит инде. Тарихтан сығып ҡараһаң, бөтәһен дә бер ергә тупларға тырышыу бер төрлөлөккә килтерәсәк, ә донъя төрлө төҫтәргә бай булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысын ижадсы һәр ваҡыт заманынан алдараҡ барырға тейеш. Ҡунағыбыҙҙың тормошҡа, киләсәккә, киләсәк хужалары - йәштәргә, тимәк, телебеҙгә, йәшәйешебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә ҡарата әйтелгән фекерҙәре күңелдәребеҙҙе имләп ебәргәндер, тип ышанғы килә. Донъяға ҡарашыңды үҙгәртеү менән үткәнең дә, киләсәгең дә үҙгәрә: яҡшы яҡ енәме, насарымы - быныһы үҙеңдән тора. Яңы йылға яҡты ниәттәр, яҡты уйҙар менән аяҡ баҫайыҡ.**

*Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.*

ӘЙҘӘГЕҘ!

# ИҢ ТӘҮҘӘ - ҮҘЕҢДЕ,

## шунан һине рәнйетеүселәрҙе ғәфү ит!



Бер ҡатын-ҡыҙ ғүмеренең һуңғы минуттарын йәшәй һәм уның алдына Ғазраил килә. Ҡатын, уны күреп, йылмая ла, үҙенең баҡыйлыҡҡа күсергә әҙер булыуын белдерә.

- Нимәгә әҙерһең? - тип һорай унан Ғазраил.

- Аллаһы Тәғәлә мине Ожмахҡа алыуға әҙермен! - тип яуаплай ҡатын.

- Ә ни өсөн Аллаһы Тәғәлә һине үҙенә алыр тип уйлайһың?

- Башҡаса булыуы мөмкин түгел, мин шул тиклем ғазап кисерҙем, хәҙер Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтенә һәм мөхәббәтенә лайыҡмын, - ти ҡатын.

- Ә нимәнән ғазапландың? - тип ныҡыша Ғазраил.

- Бәләкәй сағымда атай-әсәйем миңә һәр саҡ ғәҙел булмаған яза бирҙе: туҡманы, мөйөшкә баҫтырҙы, ҡысҡырҙы, әйтерһең дә мин ниндәйҙер ҡот осҡос нәмәләр эшләгәнмен. Мәктәптә уҡығанда синыфташтарым ҡыйырһытты, көмһетте һәм туҡманы. Тормошҡа сыҡҡас, ирем һәр саҡ эсте, миңә хыянат итте. Балаларым бар көсөмдө алды, һөҙөмтәлә хатта һуңғы юлға оҙатырға ла килмәнеләр. Эшләгән ваҡытта етәксем һәр саҡ миңә екерҙе, эш хаҡын тотҡарланы һәм ял көндәрендә эшләргә сығарҙы, һуңынан бер тин дә түләмәй, эштән ебәрҙе. Күршеләрем, уйнаш, тип, артымдан ғәйбәт һөйләне. Ә бер ваҡыт миңә уғры һөжүм итте, сумкамды урланы һәм көсләне.

- Ә һин үҙ ғүмереңдә ниндәй яҡшы ғәмәл ҡылдың? - тип һорай Ғазраил.

- Һәр саҡ барыһына ла изгелекле булдым, мәсеткә йөрөнөм, аяттар уҡыным, барыһы тураһында ла хәстәрлек күрҙем, барыһына ла ярҙам иттем. Был тормошта бик күп ауырлыҡ кисерҙем һәм Ғайса бәйғәмбәр кеүек Ожмахҡа лайыҡмын...

- Ярай... - ти Ғазраил - һине аңланым. Бәләкәй генә бер шарт ҡалды. Бер килешеүгә ҡул ҡуйһаң һәм туп-тура Ожмахҡа барып инәсәкһең.

Ғазраил уға бер һөйләмдән торған ҡағыҙ һона һәм уның тапҡырына "сәүкә" ҡуйырға ҡуша. Ҡатындың өҫтөнә боҙло һыу ҡойған кеүек була һәм ул быны эшләй алмауын белдерә. Ҡағыҙҙа: "Мин үҙемде рәнйеткәндәрҙең барыһын да ғәфү итәм һәм үҙем рәнйеткәндәрҙең барыһынан да ғәфү үтенәм", - тип яҙылған була.

- Ни өсөн һин барыһын да ғәфү итә һәм ғәфү үтенә алмайһың? - тип һорай Ғазраил.

- Сөнки улар минең ғәфү итеүемә лайыҡ түгел, әгәр мин уларҙы ғәфү итһәм, тимәк, бер нәмә лә булмаған, тимәк, улар үҙҙәренең ғәмәлдәре, ҡылыҡтары өсөн яуап бирмәйәсәк. Ә мин бер кемгә лә бер ниндәй ҙә насарлыҡ эшләмәнем, шуға бер кемдән дә ғәфү үтенә алмайым!

- Һин бының шулай икәненә ышанаһыңмы? - тип һорай Ғазраил.

- Һис шикһеҙ!

- Үҙеңә ғазап килтереүселәргә ҡарата ниндәй тойғолар кисерәһең? - тип һорай Ғазраил.

- Нәфрәт, асыу, үпкә! Уларҙың миңә ҡарата ҡылған ҡылығын хәтерҙән юйып ташлау һәм онотоу ғәҙел түгел!

- Ә әгәр һин уларҙы ғәфү итеп, ошо тойғоларҙы кисереүҙе туҡтатһаң, нисек була? - тип һорай Ғазраил.

Ҡатын бер ни тиклем уйланып тора һәм: "Эстә бушлыҡ барлыҡҡа киләсәк", - тип яуаплай.

- Һин һәр саҡ йөрәгеңдә ошо бушлыҡты тойғанһың һәм ул һине һәм тормошондоң баһаһын төшөргән, һин кисергән хис-тойғолар тормошоңа мәғәнә биргән. Ә ни өсөн бушлыҡ кисерәһең?

- Сөнки мин ғүмер буйы ятатҡан һәм улар тип кенә йәшәгән кешеләрем мине баһалар тип уйланым, һөҙөмтәлә уларҙан күңелем ҡайтты. Ғүмеремдә иремә, балаларыма, атай-әсәйемә, дуҫтарыма бағышланым, ә улар быны баһаламаны һәм рәхмәтле булманы!

- Аллаһы Тәғәлә үҙенең улы менән хушлашып, уны ергә төшөрөр алдынан фатиха итеп бер һүҙ әйтә һәм ул уға тормошто һәм үҙен аңларға ярҙам итергә тейеш була...

- Ниндәй һүҙ? - тип һорай ҡатын.

- Донъя һинән башлана!

- Был нимә аңлата?

- Ул да Аллаһы Тәғәләнең әйткәнен аңламай... Ә асылы ябай: тормошоңдағы барлыҡ ваҡиғалар өсөн бары тик үҙең генә яуаплы! Ғазапланырғамы йәки бәхетле булырғамы - үҙең һайлайһың! Хәҙер миңә аңлат, һине кем шул тиклем ғазапҡа дусар итте?

- Үҙем инде... - тип яуаплай ҡатын, ҡалтыранған тауыш менән.

- Тимәк, кемде ғәфү итә алмайһың?

- Үҙемде? - тип иламһырай ҡатын.

- Үҙеңде ғәфү итеү - тимәк, үҙеңдең хатаңды таныу ул! Үҙеңде ғәфү итеү - үҙеңдең камил булмауыңды ҡабул итеү! Үҙеңде ғәфү итеү - үҙүҙеңде асыу! Һин үҙеңде ғазапҡа дусар иткәнһең һәм бының өсөн бөтөн донъяны ғәйепләйһең, улар һинең ғәфү итеүеңә лайыҡ түгел, тип уйлайһың... Һәм Аллаһы Тәғәлә һине ҡолас йәйеп ҡаршы алһын тип теләйһеңме? Аллаһы Тәғәлә ишектәрен алйоттар һәм ғазапланыусылар өсөн асасаҡ ихтыярһыҙ алйыған ҡартҡа оҡшаған тиһеңме? Ул һинең кеүектәр өсөн камил урын булдырған тип уйлайһыңмы? Ҡасан үҙеңдең шәхси ожмахыңды булдыраһың, ҡасан унда тәү сиратта һинең үҙеңә, һуңынан башҡаларға яҡшы була, шул саҡта күк көнсәләренең ишеген шаҡырһың, ә әлегә миңә Аллаһы Тәғәлә һине, мөхәббәт һәм хәстәрлек хөкөм һөргән донъяңды төҙөргә өйрәнгәнсе, ҡабат ергә ҡайтарырға күрһәтмә бирҙе. Кем үҙе тураһында хәстәрлек күрә алмай, башҡалар тураһында хәстәрлек күрә алам тип янылыша. Беләһеңме, үҙен идеаль әсә тип һанаған ҡатын-ҡыҙҙы Аллаһы Тәғәлә нисек яҙалай?

- Нисек?

- Ул уға яҙмыштары күҙ алдында селпәрәмә килгән балалар ебәрә...

- Аңланым... Мин иремде ятатҡан һәм тоғро ир итә алманым. Балаларымды бәхетле һәм уңышлы итә алманым. Тыныслыҡ һәм гармония өҫтөнлөк иткән ғаилә усағын һаҡлай алманым... Минең донъямда барыһы ла ғазапланды...

- Ни өсөн? - тип һорай Ғазраил.

- Мин барыһы ла мине йәлләһен һәм хәлемә инһен тип теләнем... Әммә бер кем йәлләмәне... Шуға ла Аллаһы Тәғәлә мине йәлләр һәм үҙ хозурына алыр тип уйланым!

- Хәтереңдә тот: ерҙәге иң ҡәүефле кешеләр - үҙҙәрен йәлләтергә һәм хәленә индерергә тырышыусылар... Уларҙы "ҡорбан" тиҙәр... Һеҙҙең иң ҙур хатағыҙ - Аллаһы Тәғәләгә ниндәйҙер ҡорбан кәрәк тип уйлауығыҙ! Ул бер ваҡытта ла үҙ хозурына ауырлыҡ һәм ғазаптан башҡа тормошто күрмәгәндәрҙе индермәйәсәк, сөнки был ҡорбан уның донъяһында ла ауырлыҡ һәм ғазап сәсәсәк! Ергә кире ҡайт һәм үҙең тураһында, һуңынан һинең донъяңда йәшәгәндәр хаҡында хәстәрлек күр. Бының өсөн иң элек үҙеңдән наҙанлығың өсөн ғәфү үтен һәм үҙеңде ғәфү ит!

...Ҡатын күҙҙәрен йома һәм яңы исем менән икенсе атай-әсәйҙә яңы тормош башлай...

*ЗАУЫҠ*

# ХӘМЕРЛЕ ДӘҮЕР

**Поэма**

*Мөнир ИҠСАНОВ*

**Инеш**
Берҙән-бер көн дуҫтар менән
Осрашырға насип булды.
Шул осрашыу ваҡытында
Бер әңгәмә хасил булды.
Төрлө һөнәр эйәләре
Булған ине арабыҙҙа.
Ҡолаҡ һалдым журналисҡа,
Тарихсыға, ҡурайсыға ...
Ҡолаҡ һалдым барыһына.
Күңелемә тынғы тапмай,
Ҡәләм алдым ҡулдарыма.
Һыйманылар ярһып торған
Хистәр шиғыр юлдарына.
Ҡисса ҡылып, дуҫтарымдың
Ҡараштарын, хафаларын
Еткерәмен уҡыусыға,
Үпкә түгел, һабаҡ ҡалһын.

**Журналист:**
Ауылдағы ҡыҙғаныс хәл
Тетрәндәрҙе йөрәгемде.
Ул тарихты бер өләсәй
Миңә шулай һөйләгәйне:
Ҡала.
Дауахана.
Тынлыҡ.
Аҡ стеналы палатала,
Һанһыҙ йәрәхәттәр алып,
Сабый ғына бала ята.

Бала ята.
Нисәмә көн
Сыға алмай ул команан.
Был донъяға ҡайта алмай,
Китә алмай был донъянан.

Ундай ауыр хәлдә хатта
Табиптарҙың күргәне юҡ:
Баланың бер ерендә лә
Иҫән ҡалған һөйәге юҡ.

Ҡулы-аяҡтары һынған,
Арҡа менән баш һөйәге...
Балаһына ҡарап, нисек
Түҙә, тиһен, йәш әсәһе?

Әсәһенең башҡайына
Төшкән ниндәй оло ҡайғы?
Ниндәй бәлә быуған, тиһен,
Ошо кескәй балаҡайҙы?

Был тарихты бәйән итһәм,
Ышанмаҫһың һүҙҙәремә.
Күргән кеше торған, тиҙәр,
Ышана алмай күҙҙәренә.

Ҡолап төшмәгән ул бала
Өҫкө ҡаттан, тәҙ(е)рәнән.
Таламаған уны эттәр,
Машина ла бәрҙермәгән.

Ул баланы әрәм иткән
Иң-иң яҡын кешеһе бит.
Ул баланың башкиҫәре -
Һөт имеҙгән әсәһе бит...

Әсә... Ҡатын... Ул ҡасандыр
Үҙе булған сабый бала.
Бар донъяға һөйөү менән
Бағып үҫкән саф ҡыҙ бала.

Үҫкәс, әсәй булырмын, тип
Хыялланған үҙ алдына.
Бишек йырын ул йырлаған
Ҡулындағы ҡурсағына.

Әммә үҙен, үҙен кемдер
"Ҡурсағым" тип һөйгән микән?
Ҡосағында бәүелткәнме,
Толомдарын ишкән микән?

Ҡыҙ йортонда сәскә атҡан
Изгелекме, әсәлекме?
Әллә унда хөкөм һөргән
Бөлгөнлөкмө, эскелекме?

Һөйөү-наҙға ҡыҙ һыуһаған:
- Әсәм! - тигән.
Ә әсәһе ишетмәгән:
- Әсәм! - тигән.
Әсәлекте эскеселек
Еңә алған ошо өйҙә.
Эскеселек сәскә атҡан
Тотош ауыл, тотош илдә...

Эскән әсә.
Үҫкән бала,
Туҡмаҡ алып яҙмышынан.

Зәһәр боҙҙар хасил булған
Уның ҡайнар күҙ йәшенән.

Төшөнгән ул:
Кешеләрҙе
Кеше һөймәй, һүгә икән.
Кешеләрҙән шешәләрҙе
Артығыраҡ күрә икән.

Төшөнгән дә әүерелгән
Был донъяның көҙгөһөнә.
Кенә тотҡан бар ауылға,
Һәм бар донъя кешеһенә.
Һәм бер ваҡыт йөрәгендә
Ауылдағы йәштәр менән,
Башҡорт ҡыҙы тәүге тапҡыр
Иҫергәнсе хәмер эскән.

Шул ваҡытта ҡыҙ оноткан
Бөтәһен дә, бөтәһен дә.
Ят, әшәке донъяһын да,
Ят, эскесе әсәһен дә.

Ялған шатлыҡ, ялған ирек
Ҡыҙ күңелен биләп алған.
Шул хистәрҙе тағы, тағы
Кисерергә теләк тыуған.
Иҫерергә теләк тыуған.

Һәм һиҙмәй ҙә ҡалған - нисек
Булып киткән хәмер ҡоло.
Көндән-көнгә һулый барған
Һылыу ҡыҙҙың ғүмер гөлө.

Һыйлап ҡына торған уны
Шешәләштәр хәмер менән...
Йөрөй торғас, ҡыҙ ҡауышҡан
Бер шешәләш йәш ир менән.

Күп тә үтмәй, бергә торған
Йорттарында сабый тыуған.
Сабый тыуһа ла, ир-ҡатын
Һаман, һаман айнымаған.
Донъялары ҡотаймаған!

Эй Хоҙайым!
Ниңә бала
Алған һуң ул яза утын?..
Бер көн, эсеп ятҡанында,
Аҡылынан яҙған ҡатын:

Ярһыуланған, асыуланған
Ҡотһоҙ, нурһыҙ донъяһына.
Ҡуйынындағы балаһын ул
Бәргән ишек яңағына...

Йәш әсәне хөҙер инде
Төрмә микән... Ниҙәр көтә?
Ә балаһын әллә ыҙа,
Әллә иртә әжәл көтә?..

**Дуҫтар:**
Бик ҡыҙғаныс!..
Ундай хәлдәр
Осрай беҙҙә аҙым һайын.
Шул хәмерҙән бәлә сыға
Сәғәт һайын, минут һайын.

Авария, янғын сыға,
Нәфрәт менән йәбер сыға...
Күпме... Күпме кешеләрҙең
Ғүмерҙәрен хәмер ҡыя?..

**Табип:**
Әйтә ҡайһы бер табиптар:
- Белер кәрәк сама ғына.
Сама белеп ҡулланһағыҙ,
Тойорһоғоҙ файҙа ғына.

Тик халҡыбыҙ бер башлаһа,
Ташлай алмаҫ араҡыны.
Бер тамсынан сығып ҡуя
Сикһеҙ хәсрәт дарьялары.

Һин эскесе түгелһен, ти,
Күпме бәлә-ҡаза сыға
Һинең кеүек, "сама"ларын
Белеүселәр арҡаһында!

Фажиғәле хәл, тип беҙҙә
Нарыҡлана ул ҡазалар.
Фажиғәләр тыумаҫ ине,
Ҡулға хәмер алмаһалар!

Башҡорт өсөн - ағыу бит ул
Сит милләттең араҡыһы.



*Эркелешеп йыйылыша*
*Шунда Өфөләге йәштәр!*
*Күңел аса улар бөгөн,*
*Эсә-эсә тәмле сәйҙәр!*

*Ҡурайҙарын, баяндарын*
*Яңғырата дуҫ егеттәр,*
*Һәм бейергә төшөп китә*
*"Ете ҡыҙ"ҙы әхирәттәр.*

Өйрәнмәгән алкоголгә
Бабаларҙың ҡан-тамыры.

Ата-баба кеүек, бөгөн
Эсһәк ҡымыҙ, эсһәк айран,
Файҙаһы ҙур булыр беҙгә,
Булмаҫ һис тә беҙгә зыян!

**Уҡытыусы:**
Йөнө әрнеп, Булат ағай
Яҙған "Эйәрләнгән ат"ты*.
Эйәрләнгән атты уҡып,
Күҙҙәремдән йәштәр аҡты.

- Әбей батша һаулығына
Күтәр берҙә араҡыны! -
Тип Янарал мыҫҡыл итә
Шаңҡып ҡалған Аҡмал ҡартты.

- Мосолманға үлем артыҡ,
Юҡ, юҡ, эсмәм шул көфөрҙө.
- Эсмәһәң һин, эсерербеҙ,
Тултырығыҙ ҙур мөгөҙҙө!

Ҡартты салҡан йығалар ҙа
Ҡыҫҡан тешен ҡайыралар!
Һәм үңәсен ҡыҫа-ҡыҫа,
Араҡыны йотторалар!

Иҫерә лә меҫкен Аҡмал,
Урын тапмай гәрлегенән.
Ә дошмандар һаман-һаман
Туҡтамайҙар көмһетеүҙән...

Шул юлдарҙы уҡыһаса
Балаларға әсәләре!..

**Дуҫтар:**
Үткәндәре башҡортомдоң
Ҡалай булған фажиғәле!

**Тарихсы:**
Тәүге башҡорт эскесеһен
Теркәп ҡалған тарих ташы.
Аты Шәрип булыр.
Ҡаршын
Олоҫоноң старшинаһы**.

Урыҫ белә старшинаның
Һатлыҡ йәнле булғанлығын.
Хакимлыҡҡа бирә уға
Тотош Ҡаҙан даруғаһын.

Мең ете йөҙ утыҙынсы
Йылдарҙағы ихтилалда
Ҡулға ҡорал алып, Шәрип
Ҡаршы сыға үҙ халҡына!

Кaрателдәр отрядында
Ҡыла һанһыҙ енәйәттәр!
Шәрип үткән ҡанлы юлда
Ятып ҡала мең мәйеттәр!

**Уҡытыусы:**
Йөрәгендә ул генерал
Соймонов*** полктары менән,
Биш йөҙ кеше йөнен, тиҙәр,
Ҡыя үҙ ҡулдары менән.

**Тарихсы:**
Атаһынан ул арттыра
Ҡуштанлығын, золомдарын.
(Атаһы ла Мерәк мулла
Баҫҡан башҡорт болаларын).

Хәмер эсә башлай Шәрип,
Отоп урыҫ һалдатынан.
Мыҫҡыллауҙар, йәберләүҙәр
Бары күрә халыҡ унан.

Ере ҡала бөлгөнлөктә,
Сиктән ашҡас урлашыуы.
Нәфрәт менән ҡарай уға
Хатта яҡын ырыуҙашы.

Аҫабаһын, вазифаһын
Онотоп ул хәмер эсә.
Ырыуы ла, урыҫы ла
Биҙә унан ахыр сиктә...

**Көрәшсе:**
Батшаларҙың колониаль
Сәйәсәте үтә аныҡ:
Ерен баҫып алыуҙары
Күпкә еңел, эсһә халыҡ.

Белгән улар: эскеселәр
Тиҙ әйләнер маңҡорттарға.
Хәмер ҡойоп, милли рухты
Кәрәк бары һындырырға.

**Дуҫтар:**
Нисек милләт ошонан һуң
Ҡулын һуҙа араҡыға?..

Хәмер юйҙымы тарихын
Башҡортомдоң хәтеренән?
Ни әйтерҙәр ине, торһа
Олатайҙар ҡәберенән?..

**Журналист:**
Бағам йыл да үтеп торған
"Айыҡ ауыл" бәйгеһенә!
- Айыҡ тормош ҡайҙа? - тимен,
Бағып ауыл кешеһенә...

**Вахтасы егет:**
Шәп егеттәр бар ауылда,
Эшкә әрһеҙ барыһы ла.
Тик аҡсаға түгел, күптәр
Эшләп йөрөй араҡыға.

Урман ҡырҡып, бура бурап
Йөрөнөм мин үҙем башта.
Әммә бер шешәлек түгел,
Кәрәк миңә йүнле аҡса.

Запойҙарға китә кемдер,
Йөрөп ҡайтҡас вахталарҙа.
Араҡыға сарыфлана
Шулай оҙон аҡсалар ҙа...

**Журналист:**
Күрһәт, ҡайҙа алкоголь юҡ?
Күҙ һал бына зыялыға:
Ғалим, артист, уҡытыусы...
Барын "йәшел йылан" быуа!

**Дуҫтар:**
Халыҡ эсә, тип яр һала
Галстук таҡҡан етәкселәр.
Ҡайҙа улар ҡорған айыҡ
Тантаналар һәм кисәләр?

Корпоратив ойоштороп,
Йыйылышһа эшселәре,
Өҫтәл уртаһына ҡуна
Ялтыр-йолтор шешәләре.

**Уҡытыусы:**
Ҙур сер түгел.
Бына мәжлес
Ҡорһа мәктәп коллективы,
Бокалдары сыңлап тора,
Тыуһа ҡотлау-теләктәре.

Байрамдарҙан байрамдарға,
Юбилейҙан юбилейға
Уҡытыусы табынында
Ҡабатлана бер үк йола.

Иртән эшкә сығыр мәлдә
Ҡабатлана бер үк бәлә:
Кемдер сирләп ята, имеш,
Килә алмай дәрестәргә.

Ниндәй сир ул - ҙур сер түгел,
Уны һәр бер бала белә.
Уҡытыусы балаларға
Бына ниндәй һабаҡ бирә!

**Журналист:**
Кисә көлөп, йылмайышып,
Мәйҙәр ҡойған коллегалар
Ҡалай бөгөн ҡаш йыйыра,
Ҡалай бөгөн яһил улар.

Түбәнһетеп улар, хурлап,
Ноҡот уҡып тиргән була.
- Байрам итһәк тә, беҙ эште
Онотмайбыҙ, - тигән була.

Кисә:
- Ниңә эсмәйһең, тот! -
Тип ултырған директорың
Эштән ҡыуыу мәсьәләһен
Ҡуя бөгөн, ҡарап ҡырын.

Әйтегеҙ һуң, кем ғәйепле
Халҡыбыҙҙың хәрәм-хәмер
Эсеүендә?
Эскелектең
Йәйеүендә тәрән тамыр?

Кем ғәйепле ир-ҡатындың
Эшкә сыҡмай ятыуында?
Хаҡ яҙмышын, саф намыҫын
Бер шешәгә һатыуында?

**Шағир:**
Бер шағирә менән миңә
Тура килде һөйләшергә.
Әйткәндәре хәнйәр булып
Ҡаҙалдылар йөрәгемә.

Бер табында күҙ һалды ла
Өндәште ул миңә:
- Мөнир!

**Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат Рафиҡов яҙған "Эйәрләнгән ат" повесы.*
***Мөхәммәтшәрип Мерәков. 1736-1744 йылдарҙа - Ҡаршын олоҫо старшинаһы, 1739 йылдан - Ҡаҙан даруғаһының баш старшинаһы.*
****Генерал-лейтенант Л.Я. Соймонов. 1737-1740 йылдарҙа - Башҡорт комиссияһы начальнигы, башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуға етәкселек итә.*
*****Сығышы Әбйәлил районынан булған Өфө егете Рөстәм Абдразаҡов тураһында һүҙ бара.*

***✓ "Илемдә һатырға! Атайым ҡан ҡойған илемдә һатырға! Полячка булһа, йә фрнцуз, йә итальян, йә венгр... Бер хәл ... Немка! Немка өсөн илемдә һатып, рәхәттә йәшәмәм!" - тип ҡысҡырҙы ул руссалап үҙ алдына...***

Эсмәйһеңме? Улай булғас,
Түгелһең һин ысын шағир!

Башҡа һыймай!
Шиғриәт - ул
Әллә бары Есенинмы?
Йә Есенин булайым тип,
Әллә хәҙер эсәйемме?

Гүйә, шарап татымаһаң,
Шәп әҫәрҙәр яҙылмайҙар!
Гүйә, шағир түгел бөйөк
Науаиҙар, Низамиҙар!

**Дуҫтар:**
Эс! - ти ҡәрҙәш!
Ә үҙе бит
Ҡатын!
Әсә!
Вә шағирә!
Шағирә лә шулай тигәс,
Башҡаларҙан ни көтөргә?

**Шағир:**
Күпме сағыу йондоҙ һүнде,
Балҡып ижад күктәрендә.
Күпме әҫәр ынйылары
Батты шешә төптәрендә.

Хәтерләйем, күңелемдә
Сорнар булһа зарлы уйҙар:
- Әлдә һеҙ бар, хәмерҙәргә
Ҡағылмаған шағир дуҫтар!..

**Иманлы туташ:**
Ҡуймайбыҙ, ти, хәрәм ризыҡ
Беҙ мәҙәни сараларҙа.
Тик барыбер ҡуябыҙ шул
Беҙ өйҙәге байрамдарҙа.

Ғүмер буйы башҡорт үҙен
Шулай алдап йәшәр микән
Монафиҡлыҡ беҙҙең өсөн
Ҡанға һеңгән ғәҙәт микән?!

Ҡунаҡ йыйып, хәйер биреп,
Уҡытабыҙ бөгөн аят.
Хәмер тураһында шул саҡ
Уйлауы ла беҙгә оят.

Ә иртәгә инде туйға
Йыябыҙ шул ҡунаҡтарҙы.
Хәмер ҡойоп онотабыҙ
Беҙ кисәге аяттарҙы.

**Көрәшсе:**
Рәсәй халҡы эскелектән,
Эйе, күрә ыҙа, михнәт.
Рәсәйҙә лә әммә бар бит
Эскелектән азат милләт.

Йәш ир һаҡал үҫтерһенме,
Ябынһынмы йәш ҡыҙ яулыҡ,
Шул йәштәргә һаман булһа
Ҡырын ҡарай беҙҙең халыҡ.

Кеше ҡарашынан ҡасып,
Беҙҙең йәштәр ҡыла доға.
Беҙҙең йәштәр йәшенмәйсә
Эсеп йөрөй урамдарҙа.

Аң белмәгән мыжыҡ бәпәй
Һорағандай тәмле мәмәй,
Ил ҡыҙырып, теләнселәп
Йөрөй, ана, бәһлеүән мәй.

Иманлынан ятһынабыҙ,
Яман менән йөрөшәбеҙ.
Эсәбеҙ ҙә, кеше эсһә,
Эскесе, тип әрләшәбеҙ.
Эске менән көрәшәбеҙ...

**Журналист:**
"Айыҡ Рәсәй" ойошмаһы,
Йәнә "Айыҡ Башҡортостан"
Матур тәҡдим индерәләр!
Ҡасан дәүләт ҡолаҡ һалған?

Конкурсын бит заманында
Улар башлап ҡорған ине
Шау ҡуптармай, күкрәк ҡаҡмай,
Эшен эшләй торған ине.

Бер ауылдан икенсегә
Йөрөр ине йәш егеттәр.
Ауыл халҡын йыйып алып,
Һөйләр ине нәсихәттәр.

Һүҙҙәренән айырылып
Тормаҫ ине ғәмәлдәре.
Ят, ерәнес ағыу булды
Улар өсөн хәмер тәме.

Ҡараштары булды шулай:
- Беҙ мәҙәни эсеүҙәргә
Ҡырҡа ҡаршы!
Шул йоланы
Бөтөрәйек мәжлестәрҙә!

Йөрөп улар менән, шул мәл
Күп мәҡәлә яҙған инем.
Үҙем өсөн, кеше өсөн
Күп хәҡиҡәт асҡан инем.

**Дуҫтар:**
Хәмерҙән баш тартҡан йәштәр
Тейеш түгел юғалырға...

**Ҡурайсы:**
Кисә күрҙем мин уларҙы
Ағиҙелдең буйҙарында.

Ҡороп унда сәй табыны,
Таныш егет йыя дуҫтар.
Кисен унда үткәрәбеҙ
Самауырлы ритайымдар.

Былай була: яҡташ егет****
Күреп ҡайта Төркиәлә
Бер йоланы.
Оҡшап ҡала
Уға ошо күркәм йола:

Ялын урамдарҙа халыҡ
Самауырҙар ҡуя икән
Мәй түгел, ә сәй артында
Әңгәмәләр ҡора икән.

Таратырға була егет
Сәйҙәр ҡорон үҙебеҙҙә!..

**Тарихсы:**
Үҙебеҙҙә булған бит ул,
Кәрәк бары тергеҙергә!..

**Ҡурайсы:**
Эркелешеп йыйылыша
Шунда Өфөләге йәштәр!
Күңел аса улар бөгөн,
Эсә-эсә тәмле сәйҙәр!

Ҡурайҙарын, баяндарын
Яңғырата дуҫ егеттәр,
Һәм бейергә төшөп китә
"Ете ҡыҙ"ҙы әхирәттәр.

**Дуҫтар:**
Ҡалай һәйбәт: рухташ йәштәр
Күрешәләр, танышалар.
Берәүҙәре дуҫлашалар,
Берәүҙәре ҡауышалар.

**Журналист:**
Самауырлы ритайымды
Үткән мәлдә күрһәттеләр
Хатта Рәсәй каналынан.
Күрҙе микән милләттәштәр?

Шунда беҙҙең йәштәребеҙ
Үҙ милләтен күтәрҙеләр:
- Башҡорт араҡы эсмәй! - тип
Ғорурланып, һүҙ әйттеләр.

**Дуҫтар:**
Һынатмаһасы ул милләт
Ғәмле ҡыҙҙар-егеттәрен.
Ҡарты, йәше отһасы ул
Ошо күркәм ғәҙәттәрен...

**Шағир:**
Дуҫтар!
Шөкөр, беҙҙең ҡорҙан
Эсмәй бына бер кем хәмер.
Ә уйланһаҡ, шул хәмергә
Сумылған бит беҙҙең дәүер.

Бала китмәй күҙ алдымдан,
Күҙ алдыма халҡым баҫа!
Әйтерһең дә, халҡым - ошо
Ғазапланып ятҡан бала!
Ғәйепләйһем килмәй һине
Ғазаптарҙа, Ватан-әсә!
Ҡулыңдағы шешә әммә
Ҡыҙ-улыңды ҡорбан итә.

Ошо шешәң быуындарҙы
Юл ситенә бәреп китә.
Милләтемдең тәне түгел,
Йәне бит ул йәрәхәттә!
Милләтебеҙ сыға алмай
Инде нисә йыл команан.
Кем уятыр, ни уятыр
Үлемесле йоҡоһонан?..

Ир өндәшмәне. Иоланта шым ғына хушлашып ҡайтып китте. Мир бер нөктәгә төбәлгән килеш ултырып ҡалды.

Йәнә осрашырға насип булды уларға. Иртәгәһенә Магдебургтан Берлинға китергә тейештәр ине. Төшкө аштан һуң йыйынырға ярты сәғәт ваҡыт бирелде. Ҡабаланып үҙенең бүлмәһенә ингән Мирҙы Иоланта ҡаршы алды.

- Ғәфү ит, Мир, мин рөхсәтһеҙ индем, - тине ул ишек төбөндә ҡаршылап.

- Ҡурҡыныс түгел. Хушлаша ла алмай китәм тип уйлағайным. Яҡшы булған, - тине Мир ултырғыс тәҡдим итеп. Үҙе ҡатындың ҡаршыһына ултырҙы.

- Мира, - тип ҡабатланы атай кеше. Үҙенең эске кисерештәренә ҡолаҡ һалды, әммә тулҡынланыу ҙа, шатланыу ҙа тойманы. Ниндәйҙер битарафлыҡ. Өйҙә уның сәскә кеүек һылыу өс ҡыҙы көтә, бәлки, шуға ла күңеле өлпөлдәп китмәгәндер. Улың бар, тиһә, бәлки... Һәр бер атай кеүек Мир ҙа ул хаҡында хыялланды, әммә Аллаһы Тәғәлә ағаһына ике ул бирһә лә, Мирҙан малайҙы ҡыҙғанды, шикелле. Өс ҡыҙ, йәнә дүртенсегә бәпәй көтәләр. Уныһы кем булыр, билдәһеҙ... Етмәһә, бында дүртенсе ҡыҙы үҫеп еткән, имеш...

- Һин шат түгел, - тине осло күҙ Иоланта. - Аңлайым, ҡапыл әйттем. Шулай ҙа... Тағы бер тәҡдимем бар... Һин хәҙер хәрби




- Мин яңғыҙ түгел, - тип ҡарашы менән төпкә ымланы Иоланта. Шунда ғына Мир тәҙрә яңағына һөйәлеп баҫып торған ҡыҙҙы шәйләне, һаулыҡ һорашты. Ҡыҙ баш ҡағып ҡына яуап бирҙе. - Ҡара әле, берәйһенә оҡшамағанмы?

Был көтөлмәгән һорауға аптырап, Мир ҡыҙға иғтибарлап күҙ атты. Иолантанан күпкә оҙон, киң генә яурынлы, һомғол буйлы һылыу ҡыҙ. Ҡара сәстәре яурынына һибелгән, зәңгәр күҙле, ҡара ҡашлы, ҡара керпекле. Ирендәре ҡалын, үсеккән баланыҡы кеүек бүлтәйеп тора.

- Кемгәлер оҡшаған кеүек. Тик һиңә түгел, - тине Мир. - Ҡайҙалыр күргәндәй булам.

- Оҡшамаһа ла, минең ҡыҙым. Дөрөҫөрәге, һинең менән минең ҡыҙым. Мин тәүҙә өндәшмәҫкә уйлағайным. Аҙаҡ әйтергә ҡарар иттем, һин белергә тейеш. Таныш бул, ҡыҙым, атайың менән. Минең яратҡан башҡортом... ошо инде.

Ҡыҙ Мирға яҡын килеп, ҡулын һондо. Мир ҡыҙҙың усын ҡулдарына алып, оҙаҡ ҡына ҡыҫып торҙо, күҙҙәренә ҡараны. Таныш һыҙаттар эҙләне. Бәй, кемгәлер оҡшаған тигәне үҙе лә баһа! Шундай уҡ күҙҙәр, ҡаштар, танау, ирендәр, сәстәр... Үҙенең йәш сағы ҡарап тора ла баһа! Мирҙың күҙ алдына үҙенең өлкән ҡыҙы килеп баҫты, ул да һуйған да ҡаплаған атаһы. Был ҡыҙ менән икеһен бергә ҡуйһаң, игеҙәк кеүек булырҙар ине! Тик был саҡ ҡына буйға оҙонораҡ буғай.

- Матур ҡыҙ... Исемең кем? - тине ир һүҙыңҡырап.

- Исемен дә һинекенә оҡшатып ҡуштым, - тип ҡыҙы өсөн яуап бирҙе әсәһе. - Мира. Мира уның исеме.

һалдат түгел, бойороҡ үтәмәйһең... Бәлки, ҡалырһың беҙҙең янда? Бөтөн нәмәбеҙ бар, мохтажлыҡ кисермәйбеҙ. Ике ҡатлы өйөм, бөтә уңайлыҡтары бар. Һинән тик бер генә нәмә кәрәк - минең янда булыуың. Бәхетем өсөн һин генә етмәйһең, башҡорт!

- Был мөмкин түгел! - Мирҙың йәнә асыуы ҡабара башланы. - Һин белеп тораһың!

- Беләм. Ләкин... Минең дә бәхеткә хаҡым бар! Ҡыҙыңдың атайлы булырға хаҡы бар! Бер генә һүҙең етә - илселеккә барабыҙ! Һин политическое убежище һорайһың. Ҡыҙың барлығын әйтәһең, уның документы эргәбеҙҙә - Мира Мир ҡыҙы! Тағы нимә кәрәк? Һәм һин ирекле!

- Ошолай еңел генәме?

- Эйе! Эшләмәҫһең! Төрлө илдәргә сәйәхәткә йөрөрбөҙ! Франция, Италия, Америка, Испания... Ҡайҙа теләйһең, шунда!

- Еп-еңел! Ә намыҫ? Ә ғаиләм? Атайым? Тыуған ерем? Тыуған илемдә һатырға тәҡдим итәһеңме?

- Ниңә һатырға? Ярат, һағын, ҡайтып кил... Барыһы ла мөмкин. Сөнки бында кеше ирекле! Һеҙҙәге кеүек түгел!

Тап ошо аҙаҡҡы "Һеҙҙәге кеүек түгел!" тигән һүҙ Мирҙың түҙемлегенең һуңғы тамсыһы булды, шикелле. Ул Иоланталы елтерәтеп ишеккә алып китте.

- Юҡ, бер ҡасан да һеҙҙәге кеүек булмаҫ! Мин совет кешеһе! - Ҡырт ҡына артына боролдо. - Һин дә, Мира, хуш!

Ҡабаланып ишекте асты һәм уларҙы этеп тигәндәй, ишекте кире япты.

- Бәхетле булығыҙ! Тик минһеҙ!

"Илемдә һатырға! Атайым ҡан ҡойған илемдә һатырға! Полячка булһа, йә фрнцуз, йә итальян, йә венгр... Бер хәл ... Немка! Немка өсөн илемдә һатып, рәхәттә йәшәмәм!" - тип ҡысҡырҙы ул руссалап үҙ алдына...

Ҡайтыу юлы бик оҙон да, ауыр ҙа тойолдо Германия буйлап өс аҙналыҡ сәйәхәткә путевка бүләк ителгән алдынғы механизатор Мир Зиннәтуллинға. Уның күңелендәге хистәр бәрелеше үҙенең төп юғары нөктәһенә еткәйне...

## Диләфрүз

Әбуласаҡ кәләше менән улар осраҡлы ғына тап килде. Әлеге лә баяғы военкоматҡа иҫәпкә тора алмай, әленән-әле район үҙәге юлын тапаған ваҡыт ине. Ҡотлоюлдан райүҙәккә саҡлы 20 саҡрымдай юл. Ҡайһы саҡ тәпәй туратлап, ҡайһы ваҡыт юлында осраған атлы кешеләргә ултырып йөрөнө кисәге өлкән сержант. Был көндө ауылдаш апайға тоғро килеп, икәүләп санаға егелгән ат менән юлландылар. Военком менән ҡаты-ҡаты һөйләшеүҙәр, унан архивҡа инеп эҙләнеүҙәр байтаҡ ваҡытты алды. Ҡайтҡанда осрашырға һөйләшкән ергә килһә, теге апай көтөп-көтөп ҡайтып киткән икән. Ҡышҡы көн - ҡыҫҡа көн шул, тиҙ генә күҙ бәйләнә, яҡтыла ҡайтып ҡалайым тигәндер инде. "Ярай, иртәгә лә көн бар, бер ыңғай архивта ла ҡаҙынырмын", - тип, Мир бигүк ҡайғырмай, туған тейешле кешеләргә ҡунырға юлланды. Әмәлгә ҡалғандай, улары күрше ауылға һуғым һуйышырға киткән булып сыҡты. Өйҙә уларҙың ҡыҙҙары, Мирҙан 3-4 йәшкә кесе һеңлеһе генә ине. Ул ағаһына йәһәтләп ултыртып сәй эсерҙе, кискелеккә аулаҡ өйгә әхирәттәрен саҡырыуын һөйләне.

- Мир ағай, һин килгәс, мин һине бер иптәш ҡыҙым менән таныштырайым әле. Һинең армияла төшкән фотоһүрәтеңде күреп, күҙе төшкәйне. Хәҙер саҡырып киләм, - тип сығып киткәйне, ул ҡыҙ өйҙә булмаған икән. Аптыранып, күңелһеҙләнеп ҡайтып килһә, йәнә бер таныш ҡыҙы осраған. Һеңлеһе үҙенең ни йомош менән йөрөүен, нимәгә кәйефе юҡлығын әйткәс, теге ҡыҙ:

- Уға ниңә бойоғорға? Унан башҡа ла ҡыҙҙар бөтмәгән. Әйҙә, минең менән таныштыр ағайыңды! - тип һалған.

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 45-се һанында).**

✓ ***Диндең афәте - өс: боҙоҡ фәҡиһ (шәриғәт белгесе), рәхимһеҙ имам (дәүләт башлығы, ҡәбилә рәйесе) һәм наҙан мөжәһит (дин эшендә тырышлыҡ күрһәтеүсе).***



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# АЛДЫҠ - УЛ ШИКЛӘНЕҮ

**Әбү Мөхәммәт Талиб Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйләгәндәрҙән ишеткән һүҙҙәрҙе әйтеп ҡалдыра: "Шик тыуҙырған нәмәләрҙән баш тарт. Ысынлап та, дөрөҫлөктә генә тыныслыҡ, ә алдыҡ - ул шикләнеү".**

Хәҙистең тәфсире. Әхмәд бин Ханбалдың "Мөснәд"ендә яҙылғанса, хаҡ Хәсәндән: "Бәйғәмбәр әйткәндәрҙән иҫеңдә нимә ҡалды?"- тип һорағастар, ул ошо хәҙисте килтергән. Шикле нәмәне айыра белеү өсөн диндар йөрәк тауышына ҡолаҡ һалырға тейеш. Дөрөҫлөк уға тыныслыҡ бүләк итер, алдыҡ күңел тынысһыҙлығы килтерер. Ошо уҡ хәҙистең икенсе вариантында Бәйғәмбәрҙән (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Шик тыуҙырған нәмәне нисек айыра алырмын?"- тип һорағандар. Ул былай тип яуап биргән: "Ҡулыңды йөрәгеңә һал. Тыйылғандан ул берсә лепелдәр, берсә тымыр, ә рөхсәт ителгәндән йөрәк тынысланыр".



Хаҡ инаныу ихлас ышаныу талап итә. Ихлас ышанып әйтелгән һүҙҙәр йә ҡылынған эштәр дөрөҫ булыу-булмауында шик тыумаҫҡа тейеш. Шикләндергән нәмә менән булышыу хәрәм сигендә тороуҙы аңлата, унан баш тартыу - төпһөҙ упҡын ситенән артҡа сигенеүгә тиң.

Бигерәк тә бөгөнгө көндә ялған азатлыҡ рөхсәт ителгән һәм тыйылған нәмәләр араһындағы айырманы йыуып бөтөрөп барғанда, шикле әйберҙәргә сетерекле ҡараш "хәләл" һәм "хәрәм" төшөнсәләрен һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Шиктәрҙән арыныу мосолмандарҙы гонаһ ҡылыуҙан һаҡлай.

**Хәҙистән алынған дәрестәр**

1) Хәрәмдән һаҡланыу өсөн шикле нәмәләрҙән алыҫ торорға, тик хәләл - дин рөхсәт иткән эштәр ҡылырға кәрәк.
2) Мосолман йөрәге ҡабул итмәгән нәмәләргә һаҡ ҡарарға, күңеленә хуш килмәгәнде башҡармаҫҡа тейеш.
3) Диндар мосолмандар оло гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡа, кеселәренән йыраҡ йөрөй.

# САҠЫРЫЛҺАҢ, САҠЫРҒАН ЕРГӘ БАР

**Байтаҡ ғәмәл-ғибәҙәттәрҙең тәртибе Ҡөрьән-Кәримдә әйтелмәгән. Уларҙың һәммәһен дә Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм әйтеп йәки эшләп күрһәтеп биргән, сөнки Аллаһы Тәғәлә уға Үҙенең өйрәтмәләрен кешеләргә аңлатып биреү хоҡуғын Үҙе биргән. Үҙен мөьмин-мосолман тип һанаған һәр бер кеше шул әйтеп бирелгән сөннәттәрҙе бер һүҙһеҙ ҡабул итергә тейеш. Әгәр шуларҙы эшләмәһә, Ҡөрьән-Кәримдәге күрһәтмәләрҙе үтәү мөмкин булмаясаҡ. Һеҙҙең иғтибарға Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең сөннәттәренән хәҙистәр тәҡдим итәбеҙ. Был хәҙистәрҙе, аңлауы еңел булғанлыҡтан, шул көйө генә бирәбеҙ. Һәммәбеҙгә лә шул хәҙистәрҙә әйтелгән күрһәтмәләр буйынса ғүмер кисерергә насип итһен!**

Диндең афәте - өс: боҙоҡ фәҡиһ (шәриғәт белгесе), рәхимһеҙ имам (дәүләт башлығы, ҡәбилә рәйесе) һәм наҙан мөжәһит (дин эшендә тырышлыҡ күрһәтеүсе).

Ғилем афәте - өс: уны онотоу, йә ғилем әһеле булмаған кешеләргә шул хаҡта һөйләү һәм уны юғалтыу.

Бәндәләр нисек ултырһа, мин дә шулай ултырырмын, нисек ашаһа, мин дә шулай ашармын.

Монафиҡлыҡ ғәләмәте - өс: һөйләһә - ялғанлай, биргән вәғәҙәһен боҙа һәм аманатҡа хыянат итә.

Саҡырылһағыҙ, саҡырған ергә барығыҙ.

Иң тәүҙә, үҙеңдән башла - саҙаҡаны тәүҙә үҙеңә бир, үҙеңдән артҡанын - ғаиләңә, ғаиләңдән артҡанын - яҡындарыңа, яҡындарыңдан артҡанын шул рәүешле башҡаларға бир.

Һеҙгә һөйөнөс бирәм, үҙегеҙҙән һуңғыларҙы һеҙ ҙә һөйөндөрөгөҙ, кем "Аллаһтан башҡа бүтән тәңре юҡ", тип килә һәм шуға тоғро ҡала, шул йәннәткә инә.

Аллаһы Тәғәлә алдында талаҡ хәләл булһа ла, ул уға бик ныҡ асыулы.

Килешеүгә бармаған дошманлыҡтағы кешеләргә Аллаһы Тәғәлә бик ныҡ асыулы.

Хәжәттәрен ирештерерлек егәрлелеге булмағандарға хәжәт еткерергә ярҙам итегеҙ. Әгәр кемдер ялҡауҙарҙың хәжәтен солтанға ирештерһә, Аллаһы Тәғәлә шул кешенең аяҡтарын сиратҡа нығытып ҡуя.

Эй, Әҙәм балаһы - үҙеңә етерлек әҙерләнгән булһа ла, сиктән сығырлығын эҙләйһең. Эй, Әҙәм балаһы - һиндә аҙына ҡәнәғәтләнеү, күбенән туйыу тигән нәмә юҡ. Эй, Әҙәм балаһы - тәнеңдә сәләмәтлек, күңелеңдә тыныслыҡ, көндәреңде уҙҙырырлыҡ ризыҡ бар саҡта, донъяһының аҫты-өҫкә килһен!

*ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!*

# СӘЙГӘ ТӘМ-ТОМ



**Кибеттән үҙегеҙ яратҡан киптерелгән емеш-еләк, сәтләүек һатып алығыҙ. Блендерҙа тәүҙә сәтләүектәрҙе ваҡлап, аҙаҡтан емеш-еләкте өҫтәгеҙ. Килеп сыҡҡан массанан шарҙар әүәләгеҙ. Был "кәнфит"тәрҙең составы менән төрлөсә тәжрибәләр үткәрегеҙ, уға көнбағыш, ҡабаҡ орлоҡтары, бал, корица, ваниль, кероб, какао, ҡуйыртылған һөт, кокос онтаҡтары, кунжут өҫтәргә була. Иң мөһиме - быңдай тәм-том тәмле лә, файҙалы ла, уларҙы хәүефләнмәйенсә балаларға бирергә лә була.**

**1-се ысул.**

200 грамм кокос онтағына ярты банка ҡуйыртылған һөт өҫтәгеҙ һәм ҡуйырғансы болғатығыҙ. Бер ҡалаҡ тирәһе массаны усҡа алып, уртаһына миндаль сәтләүеге һалып ҡалдырабыҙ һәм шар яһайбыҙ. Һуңынан уны кокос онтағында тәгәрәтеп алабыҙ. Массаға иҙелгән банан ҡушһаң, тағы ла йомшағыраҡ һәм тәмлерәк була. 30-60 минутҡа һыуытҡысҡа ҡуйып торғандан һуң, табынға бирергә.

**2-се ысул.**

Финик, йөҙөм, күрәгә, инжирҙы ваҡ итеп турап, таҙартылған көнбағыш орлоҡтары, бер ҡалаҡ бал өҫтәргә, болғатып, шарҙар яһарға, кокос онтағында йәки кунжут орлоҡтарында әүәләргә. Һыуытҡысҡа ҡуйырға.

**3-сө ысул.**

Ваҡланған әстерхан сәтләүеген ваҡланған ҡара емеш һәм йөҙөмгә ҡушып болғатабыҙ. Массаға әфлисун цедраһы, бер әфлисун һуты, талҡан өҫтәп, болғатып, ярты сәғәткә ҡалдырабыҙ. Һуңынан бешерелгән ҡуйыртылған һөт өҫтәп, шарҙар эшләргә.

**4-се ысул.**

Иң ябайы һәм иң тәмлеһе. Таҙартылған көнбағыш йәки ҡабаҡ орлоҡтарын ҡуйыртылған һөт менән болғатып, шарҙар эшләп, көнбағыш орлоғонда әүәләп алырға.

**5-се ысул.**

Киптерелгән һөт, шәкәр пудраһы, 50 грамм аҡ май, йөҙөм, арахис, әстерхан сәтләүеге йәки ҡыҙҙырылған миндаль, әҙ генә ваниль, һибеү өсөн кокос онтағы алығыҙ. Сәтләүектәрҙе иҙеп, барлыҡ ҡоро ингридиенттарҙы ҡушырға, болғатырға, һыу өҫтәргә. Шарҙар эшләп, кокос онтағында әүәләргә.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аҫҡы аң

Һеҙ гений һәм зиһенегеҙ тураһында күберәк белгегеҙ килә. Аң менән яҡшы танышһығыҙ инде. Уҡығанда, хәрәкәт иткәндә һәм визуалләштергәндә уны файҙаланаһығыҙ. Әммә аҡылдың аңлатып булмаған башҡа формалары тураһында бер нәмә лә белмәйһегеҙ.

Ғәҙәттә, эшмәкәрлектең ҡайһы бер төрҙәрен аҡыл менән бәйләйҙәр. Ғәмәлдә, аңлатып булмаған нәмәләр ике төргә бүленә: аҫҡы һәм юғары аңға. Аҫҡы аң хәтирәләр һаҡлай һәм тәндең автоматик функциялары менән идара итә. Юғары аң, Һеҙҙең Юғары минегеҙ бөтөн киңлекте тултырған дөйөм кешелек аңы менән бәйләнештә көүҙәләндерә.

Аңдың өс өлөшөнөң яҡшы аналогы булып ҡул суҡтары тора. Уларға ҡарағыҙ һәм үҙегеҙҙе - бер, мине икенсе бармаҡ итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Һеҙ һайлаған бармаҡтың тырнағы унын башҡа участкаларынан айырылып тора. Уны аҫҡы аң менән сағыштырырға мөмкин. Ул бары тик һеҙҙеке генә. Бармаҡтың төп өлөшө - аңлауҙы аҡыл. Ул да ҡулдан айырым. Шуға ла уйҙарығыҙ бары тик һеҙҙеке генә. Бармаҡ ус - юғары аң менән тоташа. Әммә был өлөш бары тик һеҙҙең генә милек түгел! Унын аша һеҙ минең менән дә, башҡалар менән дә, йәғни аңдар берлеге менән бәйләнешәһегеҙ.

Был өлкәне нисек атаһағыҙ ҙа тап шунда һеҙҙең гений йәшәй ҙә инде. Идеялар ҙа шунан сыға. Уңайлы итеп ултырып, күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алыу менән һеҙ шунда күсәһегеҙ.

## Һеҙ - берҙәм Ғаләм үҙәге

Һуңғы биткә еткәс, мин һуңғы һүҙҙең, һығымтаның матур булыуын теләп мөрәжәғәт иттем - ул уҡыусыны илһамландырырға, унын өмөтөн уятырға, алға, яңы бейеклектәргә ынтылыш бирергә тейеш ине. Шул мәлдә миңә Лондондағы яҙыусы дуҫымдың хатын килтерҙеләр. Унда һоҡланғыс фекерҙәр бар ине. Уларҙы яйлап, һәр һөйләм артынан пауза эшләп, раҫлауҙарығыҙҙың мәңгелек залдары буйлап үтеп, кешелеккә, яҡындарығыҙға ярҙам итеүен аңлап уҡығыҙ.

- Мин үҙемде үҫеүсе һәм күпте белергә ынтылыусы булараҡ ҡәҙерләйем.
- Мин үҙемде тормошҡа, мөхәббәткә, шатлыҡҡа, тыныслыҡҡа һәм именлеккә лайыҡ булғаным өсөн яратам.
- Мин үҙемде Аллаһы Тәғәлә кеүек яратылғаным өсөн ихтирам итәм.
- Мин үҙемде уҡыуға һәләтле булыуым, хәҙер һәм ошонда тормоштан ҡәнәғәтлек ала белеүем өсөн маҡтайым.
- Мин үҙемде тыумыштан уҡ теләһә ниндәй ҡурҡыуҙарҙан, кире уйҙарҙан һәм кәмселектәр комплексынан өҫтөн булғаным өсөн лайыҡлы баһалайым.
- Мин үҙемде ысынбарлыҡта нисек бармын, шулай булып ҡалғаным, аҙым һайын ошо ысынбарлыҡты күрһәтә алғаным өсөн ихтирам итәм.
- Мин үҙемде яратыусы Аллаһы Тәғәләнең ҡәҙерле бер балаһы булғаным өсөн яратам.
- Мин үҙемдә тик яҡшы сифаттарҙы ғына күрәм: түҙемлек, шәфҡәтлелек, наҙлылыҡ һәм матурлыҡ.
- Мин үҙемә тоғро булырға ант итәм һәм хәтеремдә Аллаһы Тәғәләнең ҡәҙерле һәм һөйкөмлө балаһының - үҙемдең образымды һаҡларға һүҙ бирәм.
- Эйе, мин Аллаһы Тәғәләнең һөйөклө балаһы. Мин быны ҡабат-ҡабат таныйым һәм үҙемә ышанырға һүҙ бирәм.Рәхмәт Һиңә, Аллаһы Тәғәлә!

**Роберт СТОУН.**
**(Аҙағы).**



### 16 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30 Х/ф "Воры в законе". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Большая премьера. "Нулевой пациент". Основано на реальных событиях". [16+]
22.35 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-2". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Пофутболим? [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Т/с "Откройте, милиция!" [12+]**
**2.30 Тормош. [12+]**
**3.00 "Курай даны". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 17 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Нулевой пациент". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-2". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30, 3.00 История одного села. [12+]**
**1.00 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 18 ЯНВАРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Нулевой пациент". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Д/ф "Иван Зубков. Спаситель Ленинграда". [12+]
2.55, 4.00 Т/с "Каменская-2". [12+]
4.45 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30, 3.00 "Курай даны". [12+]**
**10.45 Әлләсе... [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 23.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.45 Интервью. Доступная среда. [12+]**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История признания. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.50 Хоккей. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**1.15 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 19 ЯНВАРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Нулевой пациент". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-2". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 Д/ф "Мир - мозаика". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 3.45 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Формула меда. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Салават". [12+]**
**4.30, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

### 20 ЯНВАРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.15 Х/ф "Zолушка". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Х/ф "Экипаж". [6+]
0.15 Х/ф "Легенда №17". [6+]
2.35 Х/ф "Красавец и чудовище". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.15, 17.45 "Курай даны". [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Д/ф "Забих Искужин: парень с берегов Сакмары". [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [0+]**
**17.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00, 3.30 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.50 Хоккей. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.30 Новости недели (на баш. яз).**
**0.00, 4.15 "Ете егет". [12+]**
**1.15 Спектакль "Раб Божий предполагает". [12+]**
**2.45 Автограф. [12+]**

### 21 ЯНВАРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "ПроУют". [0+]
11.05 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Д/ф Премьера. "Ладога. Нити жизни". К 80-летию прорыва блокады Ленинграда. [12+]
13.25 Т/с "Ладога". [16+]
17.20 Премьера. "Угадай мелодию". 20 лет спустя. [12+]
18.10 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Сегодня вечером". [16+]
20.20 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию-2023. Прямой эфир. [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию-2023. [0+]
23.35 Х/ф "Трое". [16+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Теорема Пифагора". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Место силы". [12+]
0.45 Х/ф "Городская рапсодия". [12+]
4.10 Х/ф "Я подарю тебе любовь". [12+]
5.54 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Творческий вечер народного артиста РБ, лауреата премии им. С. Юлаева Рифа Габитова. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [6+]**
**19.15, 4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15, 2.45 "Башкорт йыры". [12+]**
**0.45 Спектакль "Счастье". [12+]**
**3.30 "Бай". [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Үткән гүмер. [12+]**

### 22 ЯНВАРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Гусарская баллада". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00, 14.45 Новости (с субтитрами).
12.20 "Видели видео?" [0+]
15.00 Х/ф "Броненосец "Потемкин". К 125-летию гения. [12+]
16.45 Д/ф "Александр Ширвиндт. "Две бесконечности". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию-2023. Прямой эфир. [0+]
21.00 "Время".
22.35 "Горячий лед". Кубок Первого канала по фигурному катанию-2023. [0+]
23.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]
0.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

6.15, 3.10 Х/ф "Жена по совместительству". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Теорема Пифагора". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Жених". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Полезные новости. [12+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15, 2.45 Историческая среда. [12+]**
**16.45, 1.30 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 Әлләсе... [12+]**
**18.15, 3.45 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**18.50 Хоккей. "Локомотив" (Ярославль) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30, 3.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Дознание. [16+]**
**23.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**2.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҒИНУАР ЮБИЛЯРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**51-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Карта. Ҡомалаҡ. Сәкән. Аҡшам. Табаҡ. Указ. До. Стадион. Ҡумыҙ. Ситән. Туҡал. Оло. Батыр. Ваза. Аҙыҡ. Ҡурай. Оят. Көрт. Военрук. Аҫҡыс. Ғәбитов. Самауыр.
**Вертикаль буйынса:** Солтанов. Аналыҡ. Ут. Иҙелбаев. Ҡала. Осағас. Мунса. Күмәс. Оҫҡон. Рабиға. Күзбәков. Өкө. Арҡан. Тоҡ. Баҡта. Уҡра. Ынйы. Ҡаҙ. Рәйес.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (24) дүшәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:53 | 17:19 | 18:49 |
| 17 (25) шишәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:55 | 17:21 | 18:51 |
| 18 (26) шаршамбы | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:57 | 17:23 | 18:53 |
| 19 (27) кесе йома | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:58 | 17:24 | 18:54 |
| 20 (28) йома | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 16:01 | 17:26 | 18:56 |
| 21 (29) шәмбе | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 16:03 | 17:28 | 18:58 |
| 22 (30) йәкшәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 16:05 | 17:30 | 19:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХӘҘИСТӘРҘӘН

# ОШО ХӘЛДӘРҘӘН ҠУРҠЫҒЫҘ!

• Минән һуң өммәтемдә буласаҡ өс төрлө хәлдән ҡурҡам: етәксе дайрәләрҙең ғәҙелһеҙлек итеүе, йондоҙҙар менән күрәҙәлек итеүгә ышаныу һәм тәҡдирҙе ялғанға сығарыу.

• Аллаһы Тәғәлә дүрт төркөм кешегә асыулы: ант итә-итә һатыу итеүсе, тәкәббер фәҡир, аҙғын ҡарт һәм золомлоҡ ҡылыусы имам.

• Өммәтем өс нәмәнән һис туктала алмаҫ: мәшһүрлектәре менән маҡтаныу, йыназа артынан тауышланып илау һәм тәбиғәт шарттары хаҡында күрәҙәлек итеү.

• Һәләкәткә илтәсәк ете төрлө енәйәттән һаҡланығыҙ: Аллаһҡа ширек ҡатнаштырыу, сихыр, хаҡһыҙға кеше үлтереү, риба йәки етемдәрҙең малын ашау, һуғыш яланынан ҡасып китеү, тоғро ир ҡатынына яла яғыу.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 ғинуар "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 16+
**18-19 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**20 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+
**21 ғинуар "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрама. 18.00 16+
**22 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 ғинуар "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев), трагикомедия. 12+
**19 ғинуар "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 12+
**20 ғинуар "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+
**"Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди. 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ғинуар "Шлягеры советского кино".** 6+
**20 ғинуар "Разговор о самом важном с Игорем Прокопенко".** 12+
**21 ғинуар "Золотая коллекция Барокко".** 18.00 6+
**22 ғинуар "Һандуғас моңо"** Х. Әхмәтов иҫтәлегенә концерт. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**21-22 ғинуар Премьера! "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12.00, 14.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19 ғинуар "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһы хроникаһы. 16+
**21 ғинуар "Золушка"** (Ш. Перро), әкиәт. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 ғинуар "Онотолған әҙәм"** (Н. Хикмәт), драма. 12+
**21 ғинуар Премьера! "Күңелемдең моңло ҡылдары",** концерт. 18.00 6+
**22 ғинуар "Маленькая история о Маленьком Муке"** (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+
**"Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**17-18 ғинуар "Самый вкусный Новый год"** (Т. Ғилманова), рус телендә әкиәт. 10.00 0+

## БР Милли музейы

**19 ғинуар "Боронғо Өфө хазиналары:** Византия алтыны һәм Иран көмөшө зиннәте" күргәҙмәһенең автор экскурсияһы.15.00 6+
**20 ғинуар** 1813-1814 йылдарҙа урыҫ армияһының сит илдәргә походы башланыуға 210 йыл тулыуға арналған түңәрәк өҫтәл. 14.00 16+
**21 ғинуар "Элмә"** ҡабартма ҡайыу буйынса оҫталыҡ дәресе. 12.00 6+
**Archeokids:** йәш археолог курсы. 14.00 6+

*БӘХИЛЛӘШЕҮ ҺҮҘЕ*

# ҺИНЕ МӘҢГЕ ОНОТМАБЫҘ!



***Рәшит ШӘКҮР, Башҡортостандың халыҡ шағиры, йәмәғәт эшмәкәре:*** Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов етәкселек иткән йылдар - беҙҙең республика һәм халҡыбыҙ тарихында айырым бер дәүер булып тора. Ул Башҡортостан тарихында бик ҡәҙерле дәүер булып ҡаласаҡ. Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкләгән осорҙа быға тиклем бөтөнләй булмаған ҙур үҙгәрештәр барлыҡҡа килде. Беҙ ҙур тырышлыҡ менән Башҡортостан Фәндәр академияһын булдырҙыҡ. Бөгөн иһә ошо академияның һөҙөмтәле эшләүен, ҙур уңыштарға өлгәшеүен күрәбеҙ. Ғүмер буйы киностудия тураһында хыялланып йәшәнек. Һәм, ниһайәт, суверенитет яулағандан һуң киностудиябыҙҙы ойоштороорға мөмкинлек барлыҡҡа килде. 1997 йылда Рәсәйҙә беренселәрҙән булып "Башҡортостан" энциклопедияһын баҫтырып сығарҙыҡ. Ул башта урыҫ телендә, икенсе йылына башҡортса донъя күрҙе. Беҙҙең энциклопедия эшмәкәрлеге ошо дәүерҙән башланды.

Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкселек иткән осорҙа быға тиклем булмаған өр-яңы гәзит-журналдар сығарыуға өлгәштек. Бөгөнгө көндәге башҡорт-татар телендә сыҡҡан баҫмалар барыһы ла Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкселек иткән дәүерҙең, суверенитет яулауыбыҙҙың емештәре. Шуның өсөн дә Башҡортостан халҡы ғүмер-ғүмергә Мортаза Ғөбәйҙулла улы тураһындағы хәтирәләрен йөрәк түрендә һаҡлаясаҡ.

***Рафаэль БАЙДӘҮЛӘТОВ, 1999-2008 йылдарҙа Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры:*** Минә оҙаҡ йылдар Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән эшләргә тура килде. Республиканы 1993 йылда, иң ауыр ваҡытта етәкләп, ул уны алдынғылыҡҡа сығарҙы. Ул ысынлап та халыҡтың мәнфәғәте өсөн эштәр башҡарҙы. Башҡортостанды Рәсәйҙең алдынғы төбәге тип танынылар, күп кенә сит илдәрҙә белделәр. Уны федераль власть белде һәм хөрмәт итте, ул билдәле сәйәсмән булды.

Ул үҙенсәлекле һәм шул тиклем тырыш кеше ине! Һәр ваҡыт кешеләрҙең тормошон нисек тә яҡшыртыу тураһында уйланы. Берәй районға бармаған аҙнаһы булманы, республиканың барлыҡ мөйөштәрен йөрөп сыҡты. Унда нимәләр эшләргә кәрәклеген асыҡлап, күрһәтмәләр бирҙе. Беҙ тиҙ генә эшкә тотона инек, сөнки беләбеҙ: ул бер нәмәне лә онотмай һәм һорай.

Ул команда туплай белде. Беҙҙең коллектив бик эшсән ине һәм бик күп эшләне. Республика ҡалаларында ғына түгел, төпкөл ауылдарҙа торлаҡ һәм юлдар төҙөлдө, газ үткәрелде. Ул бөтә процесты контролдә тотто, уның теүәл үтәлешен талап итте.

Мортаза Ғөбәйҙулла улы ауыл халҡына айырым иғтибар бирҙе. Ул ауыл предприятиеларын һаҡлап ҡалды. Ельциндың совхоздарҙы бөтөрөү тураһындағы бойороғона ҡарамаҫтан, үҙенең указын сығарҙы - предприятиелар юридик берәмек булараҡ үҙгәрһен, әммә ҡалһын. Ауылды бер ҡасан да онотмаҫҡа, ярҙам итергә, тип әйтә килде. Шуға күрә газ үткәреү тулы ҡеүәттә барҙы, ул саҡта уҡ газ үткәреүҙе 86 процентҡа тиклем еткерҙек һәм илдә беренсе урынға сыҡты. Автомобиль юлдарының оҙонлоғо буйынса алдынғы урынға сыҡтыҡ. Тағы бик күп нәмәне һанап китергә мөмкин. Шуға күрә ул халҡыбыҙҙың лайыҡлы улы булып иҫтә ҡалыр, уның ҡаҙаныштарын бер кем дә онотмаҫ.

***Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ:*** Мортаза Рәхимовтың 70 йәшлек юбилейына яҙған мәҡәләмде "Атайыма оҡшағанһығыҙ" тип атағайным. Ысынлап та, кемдәр генә Мортаза Ғөбәйҙулла улын үҙенең атаһына оҡшатманы икән!

Әгәр ҙә йортта атай кеше үҙ урынында булһа, үҙенең вазифаһын намыҫ менән үтәһә, балаларына тигеҙ ҡараһа, ул йортҡа ҡот-бәрәкәт ҡуна. Ундай йорт менән башҡалар иҫәпләшә, ихтирам, хөрмәт менән ҡарай, уға тиңләшергә тырыша.

Минең атайым да ана шундай кеше ине. Уның ғәжәйеп бер сифаты булды. Атайым ниәт иткән эшенә, күп тә уйлап тормайынса, шунда уҡ тотондо. Икеләнеү тигән тойғо уға хас түгел ине. Хәбәр һатырға уның ваҡыты бөтөнләй булманы. Башҡалар хыял йөрөтөп, оҙайлы пландар ҡороп бөткәнсе, атайым ул эште башҡарып та ҡуя торғайны...

Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов та тап шундай кеше булды. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғандан алып, ҡыл да ҡыбырлата белмәгән бушбоғаҙ сәйәсмәндәр ике тиҫтәгә яҡын ваҡыт көнөн-төнөн: "Киләсәктә Рәсәй нисек булырға тейеш?" - тип сүбәк сәйнәгәндә, Президентыбыҙ Рәхимов киләсәктәге Рәсәйҙең идеаль модулен төҙөп тә ҡуйҙы. Һәр хәлдә, прогрессив ҡарашлы сәйәсмәндәр беҙҙең республиканы тап шулай итеп күрҙе. Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостанды шул саҡта "бер тамсыла сағылған Рәсәй"гә тиңләне...

Баҡыйлыҡҡа күсеүҙе халыҡта "төп йортҡа ҡайтыу" тип тә атау бар. Илебеҙ, республикабыҙ үҫешенең иң киҫкен, иң һынылышлы, иң ауыр мәлендә тормошобоҙ карабын сайҡалтмайса алып барған, иң ауырын үҙ иңендә күтәргән ил ағаһы Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов "төп йортҡа" ҡайтты. Инде лә тынғыһыҙ йәне тыныслыҡ тапһын! Амин!

***Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:*** Әҙәм балалары фани донъяға килә, үҙҙәренә ярашлы урындарын алып, ғүмер кисерә. Барыһы лә ҡәҙимгесә, тормош ҡанундары шулай. Әммә барса замандарҙа ла, башҡаларҙан айырылып тороп, замандаштарын алға әйҙәүсе, уларҙың йәшәйеш юлдарын билдәләүсе юлбашсылар була. Мортаза Ғөбәйҙулла улы ла ошондай аҫыл заттарҙан булды.

Ә бит ул ҡасандыр бер ҡәҙимге башҡорт ауылында тыуып үҫкән егеттәрҙең береһе. Уның бала сағы ауыр һуғыш йылдарына тура килә. Атаһы Ғөбәйҙулла һуғыш ҡырында, ә уның ғаиләһе ауылда, ер өйҙә көн күрә. 1946 йылда ғына тыуған яғына иҫән-һау ҡайтҡан яугир, ғаиләһенең ниндәй хәлгә төшкәнен күреп, ултырып илай. Әммә тормош дауам итә, барса халыҡ яҡты киләсәк хаҡына ал-ял белмәй эшләүен дауам итә.

Йәш егет Мортаза ла, белемле, уҡымышлы кешеләрҙең ил өсөн үтә лә кәрәкле булыуын яҡшы аңлап, нефтсе һөнәрен һайлай. Ул ябай операторҙан СССР-ҙағы иң ҙур нефть эшкәртеү заводы директоры вазифаһына тиклемге оло хеҙмәт юлын үтә. СССР тарҡалған осорҙа тап шундай башҡорт уҙаманының Башҡортостан кеүек ҡеүәтле республиканы етәкләп, уны ҡоротҡос реформалар ҡыйралышынан имен-аман алып сыға алыуы - үҙе бер мөғжизә кеүек хәҙер. Мортаза Рәхимов үҙ республикаһында ғына түгел, бөтөн Рәсәй кимәлендә оло абруй ҡаҙанды.

Етәксе генә булманы Мортаза ағайыбыҙ, ул асыҡ күңелле, ярҙамсыл, һәр бер ябай ауыл кешеһенә - механизатормы ул, һауынсымы, уҡытыусы йәиһә табипмы - иғтибарлы булды, уларҙың йөрәгенә үтеп инерҙәй һүҙҙәр таба белде. Етәкселек итеүенең һәр көнөндә тиерлек ауылдарҙы хәстәрләне ул. Шуның өсөн дә ауыл халҡы уны ихлас ҡабул итә, үҙ башҡорто итеп ярата ине. Иманыбыҙ камил, М.Ғ. Рәхимов илебеҙ тарихында ла, халҡыбыҙҙың мәңгелек хәтерендә лә лайыҡлы урын алды. Нисек кенә үкенесле булмаһын, Мортаза бабайыбыҙҙың баҡый донъяларға күсеүе Башҡортостаныбыҙҙың һуңғы өс тиҫтә йыл арауығындағы өр-яңы тарихының тамам булыуын аңлата. Әммә тормош дауам итә - Мортаза Ғөбәйҙулла улы киләсәккә оло өмөттәр һәм ышаныс менән йәшәне, беҙ ҙә ошо хәҡиҡәтте уның васыяты итеп ҡабул итәйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы Мортаза Ғөбәйҙулла улын атаһылай, ағаһылай күргән, бөйөк шәхес итеп баһалаған бар кешеләрҙең ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЯҠШЫ ЯЛҒАНДАН...

### яман дөрөҫлөк яҡшы

Наҙан кеше һуҡырҙан яман, ялҡау кеше барынан да яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡта дуҫтар артмай, был ваҡыттағы юғалтыуҙарҙы кире ҡайтарып булмай.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Бурысыңды атҡарыуҙан да юғарыраҡ бөйөклөк тә, шатлыҡ та юҡ.

**(Эрнст Ренен).**

Ҡайһы берәүҙәр асылы менән түгел, атамаһы менән генә кеше тип нарыҡлана.

**(Цицерон).**

Дуҫлыҡ "тейешһең" тип талап итмәй, мөмкин булғаны менән ҡәнәғәтләнә.

**(Аристотель).**

Мөхәббәт хакимлыҡ иткән урында Көстөң хакимлығына урын ҡалмай, ҡайҙа Көс хакимлыҡ итә, унда Мөхәббәткә урын юҡ.

**(Карл Юнг).**

"Нинә һыу эсеү гонаһ түгел икән, - тигән бер итальян, - ул саҡта ул шундай тәмле булыр ине".

**(Георг Кристоф Лихтенберг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарттың өлкән улы өйләнеп, башҡа сығып йәшәй башлайҙар. Бер саҡ улы ата-әсәһенең хәлен белергә килә. Атаһы менән әсәһенең йәшәйеше шул тиклем күңелһеҙ тойола йәш кешегә һәм ул байтаҡ ваҡыт уларға йәлләп ҡарап ултыра. Ул үҙенең кәләше менән яратышып туя алмауын, һәр саҡ бер-береһенең ҡулдарынан ғына тотошоп, етәкләшеп йөрөүҙәрен, бер-береһенә әлен-ән-әле мөхәббәт һүҙҙәре еткереүҙәрен иҫенә төшөрә. Шунан атаһына былай ти:**

**- Атай, ни өсөн һеҙ әсәйем менән бер-берегеҙгә һөйөү һүҙҙәре һөйләмәйһегеҙ? Шул тиклем күңелһеҙ йәшәйһегеҙ. Мин һеҙҙең дә беҙҙең кеүек бер-берегеҙҙе яратыуығыҙҙы, бәхетле булыуығыҙҙы теләйем...**

**- Әй, улым, - ти атай кеше, - һинең мөхәббәтең бала йәшендә генә бит әле, ул йылдан-йыл үҫер, өлкәнәйер, яңы һүҙҙәр өйрәнер, яңы мөнәсәбәттәргә яраҡлашыр. Мәҫәлән, мин әсәйеңдең күршеләр менән сираттағы тапҡыр талашып ҡайтып, уларға зарлана башлауын тыңлайым да, "Мин һине ҡалай яратам", тип уны бүлдерә һалам. Минә балыҡ тота торған ауымды тегергә ярҙам иткәндә: "Эй, ҡартыҡайым, яратам да инде үҙеңде", - тигән һүҙҙәрҙе әсәйең дә әйтә. Ау тегергә яратмағанын беләһең бит һин уның..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ГАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
13 ғинуар 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 3540
Заказ - 43